ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Ғинуар






# “ЯҘЫЛ ДА, БҮЛӘК ОТ!” БӘЙГЕҺЕ ТАМАМ

**Барыҫ йылына “Аманат” ҙур уңыш менән килде: йыл башынан тиражыбыҙ 17 меңдән ашып китте! Шул уңыш менән бергә, беҙҙең уҙған сентябрҙә үк иғлан ителгән “Яҙыл да, бүләк от!” бәйгеһендә ҡатнашыусылар ҙа үҙ уңышын йыя. Бына, улар – “Аманат”ҡа яҙылып, бүләк отоусы бәхетлеләр:**

**Велосипед** – Учалы ҡалаһының 12-се Башҡорт лицейы уҡыусыһы **Амур Моратшиндың** өлөшөнә төштө;

**Фотоаппараттың эйәһе** – Дүртөйлө районының Иҫке Яндыҙ мәктәбе уҡыусыһы **Миләүшә Ҡадирова**;

**Кеҫә телефонына иһә** – Әбйәлил районы Михайловка урта мәктәбе уҡыусыһы **Илнар Хөснийәров** лайыҡ булды;

**Магнитола** – Иглин районының Түбәнге Ләмәҙ мәктәбе уҡыусыһы **Артур Мөләковтыҡы**;

**ДВД-плеерға эйә** булған уҡыусыбыҙ – Ейәнсура районы Яңыбай урта мәктәбе уҡыусыһы **Рүлә Бармаҡова**.

*“Аманат”тың дәртләндереү приздарына, йәғни Маҡтау билдәләренә был юлы түбәндәге уҡыусылар лайыҡ булды:*

**Алина Кашапова**, Краснокама районының Иҫке Йәнйегет мәктәбе уҡыусыһы;

**Регина Мөхәмәтйәнова**, Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районының Тәхәлем урта мәктәбе уҡыусыһы;

**Ҡояш Хисаметдинова**, Шишмә районының Әлбәй мәктәбе уҡыусыһы;

**Әлмир Ғилметдинов**, Саҡмағош районының Рәжәп мәктәбе уҡыусыһы;

**Светлана Бакирова**, Балтас районының Үрге Ҡанһөйәр мәктәбе уҡыусыһы;

**Гөлназ Низаева**, Нуриман районының Иҫке Күл мәктәбе уҡыусыһы;

**Әлфир Ибраҡов**, Ауырғазы районының Толбазы башҡорт гимназияһы уҡыусыһы;

**Гөлназ Хәсәнова**, Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Бәпес мәктәбе уҡыусыһы;

**Рөстәм Миһранов**, Миәкә районының Илсеғол башҡорт гимназияһы уҡыусыһы;

**Айгөл Исламова**, Бишбүләк районының Ҡаныҡай мәктәбе уҡыусыһы;

**Луиза Заһиҙуллина**, Белорет районының Инйәр ҡасабаһының 2-се башҡорт мәктәбе уҡыусыһы;

**Динара Әсләмова**, Асҡын районының Упҡанкүл мәктәбе уҡыусыһы;

**Лилиә Әбхәлимова**, Күмертау ҡалаһының 3-сө Республика башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы;

**Самат Ғилфанов**, Борай районының Иҫке Ҡарағош мәктәбе уҡыусыһы;

**Заһир Латипов**, Ишембай районының Маҡар урта мәктәбе уҡыусыһы;

**Фәҙел Аҙнағолов**, Йылайыр районы Йылайыр ауылының Шәйехзада Бабич исемендәге Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы;

**Азамат Йомабаев**, Әбйәлил районының Яңы Балапан мәктәбе уҡыусыһы;

**Юламан Бикбулатов**, Бөрйән районының Яңы Усман мәктәбе уҡыусыһы;

**Айзилә Йосопова**, Баймаҡ районының Ишей мәктәбе уҡыусыһы;

**Айзилә Басариева**, Өфө ҡалаһының Мөхәмәт Искужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы уҡыусыһы.

**Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ!**

**“Аманат”тың Маҡтау билдәләре почта аша ебәреләсәк. Ә төп бүләктәрҙе, вәғәҙә итеүебеҙсә, мәктәпкә алып барып тапшырасаҡбыҙ.**

**Мөхәрририәт.**



## “Беҙҙең яңы мәктәп”

2010 йыл Рәсәйҙә Уҡытыусы йылы тип иғлан ителде. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев Федераль йыйылышҡа мөрәжәғәтендә “Беҙҙең яңы мәктәп” тигән инициатива менән сығыш яһаны. Ошо йәһәттән йыл эсендә хөкүмәт тарафынан педагогтарҙың эш шарттарын яҡшыртыу, уларҙың абруйын, эш хаҡын күтәреү буйынса байтаҡ эштәр ҡарала. Шулай уҡ мәктәптәрҙә киләһе йылдан физкультура дәрестәрен үткәреү буйынса яңы нормативтар эшләй башлаясаҡ. Башланғыс синыфтар уҡытыусыларының, физкультура һәм музыка дәрестәре белгестәренең дә абруйын күтәреп, айырым предметтарҙан уҡытыусыларға тиңләү ҙә ҡаралған.

## Һәләтлеләр – иғтибар үҙәгендә

Белорет ҡалаһының 8-се урта мәктәбе “Һәләтле балалар – Рәсәйҙең киләсәге” тигән энциклопедияға индерелде. Был федераль энциклопедия тәбиғи һәм гуманитар фәндәрҙе өйрәнеүҙә, сәнғәт, техника һәм спортта оло ҡаҙаныштарға ирешкән балалар тураһында хәбәр итә. Унда шулай уҡ алдынғы уҡыу йорттары эшмәкәрлеге лә яҡтыртыла. Был энциклопедияға эләгеү – бала өсөн иғтибар үҙәгенә күсеүгә тиң.

## Иң яҡшылар

Санкт-Петербургта үткән “Матур мәктәп” халыҡ-ара конкурсында Башҡортостан исеменән сығыш яһаған Өфөнөң 118-се, 68-се мәктәптәре, 65-се гимназия, Белорет районының Сермән балалар йорто, Әлшәй районының пионерҙар һәм уҡыусылар йорто дипломдар яуланы. Әлшәйҙәр уҡыу йортоноң оригиналь концепцияһы өсөн Швецияға һәм Финляндияға туристик сәйәхәт менән бүләкләнде.

## “Йәшелдәр” ал бирмәй

“Йәшел планета – 2009” халыҡ-ара балалар экология форумында Башҡортостандың ете уҡыусыһының ижади эштәре юғары баһаларға лайыҡ булды. Был конкурсҡа улар 12 мең коллективтан ҡатнашҡан 150 мең бала араһынан һайлап алынғайны. Балалар тәбиғи материалдарҙан эшләнгән әйберҙәр, һүрәттәр, фотолар һәм әҙәби әҫәрҙәр конкурстарында еңеүсе булдылар.







## Йәшлек менән олпатлыҡ ярышы

Башҡортостанда XII Республика уҡыусылар спартакиадаһы дауам итә. Программаға 12 спорт төрө буйынса ярыштар индерелгән. Көс һынашыу былтыр уҡыу йылы менән бергә башланғайны, быйыл йәйге каникулда ғына тамамланасаҡ.

Йәш быуынға сәләмәт йәшәү рәүешен киңерәк таратыу маҡсатында үҫмерҙәр менән ярыштарҙа Хөкүмәт вәкилдәре, “Башинформ” агентлығы, “Башҡортостан” дәүләт телерадиотапшырыуҙар комитеты, республика һәм гәзит-журналдар редакцияларының йыйылма командалары ҡатнаша. Декабрҙә улар Өфөнөң 20-се һәм 158-се башҡорт гимназия командалары менән мини-футбол һәм шахмат буйынса көс һынашты. Етеҙлек талап иткән ярыштарҙа, ғәҙәттә, гимназиялар командалары еңеүсе булһа, таһыллыҡ талап иткән төрҙәрҙә улар өлкән быуындан ҡалыша.

**ҺҮРӘТТӘ: Мини-футбол буйынса “Аманат”тың махсус призына лайыҡ булған 20-се гимназия уҡыусыһы, Рәми Ғариповтың ейәне Йәлил ҒАРИПОВ.**

# Тиҫтерҙәрең ижады

## Йәмле ҡыш

Ялтырай ерҙә ҡарҙар,
Йылмайып та ҡарайҙар.
Ҡыҙыл битле малайҙар
Ҡар бабайын яһайҙар.

Урмандағы ағастар
Аҡ һырғалар тағалар,
Оло, матур йылғалар
Боҙ аҫтынан ағалар.

**Альбина МӨХӘМӘҘИЕВА,**
**Бәләбәй башҡорт**
**гимназияһы уҡыусыһы.**

## Ҡыш

Ҡыш бабай йәйҙе
Ап-аҡ юрғанын.
Ағаска элде
Шәлдең йомшағын.

Бурандар өрҙө
Ҡола яланға,
Һүрәт төшөрҙө
Һәр бер аҡланға.

Юлдар ҙа күптән
Аҡ ҡар аҫтында,
Ынйылар уйнай
Уның өҫтөндә.

Ҡоштар һайрамай
Йылға буйында.
Айыуҡай йоҡлай
Ҡайын янында...

**Гөлсиә СОЛТАНОВА.**
**Йылайыр районының**
**Байғужа ауылы.**





## Башҡортостан – илем

Башҡортостаным – илем!
Һөйөклө тыуған ерем!
Һыуыңды мин эсәмен.
Башҡортостаным – илем,
Һиндә тыуып, һиндә үҫәмен.

Башҡортостаным –илем!
Минең наҙлы йырым,
Бик күп көйҙәр һиңә арнала,
Бик күп йырҙар һиңә йырлана ла,
Сәсән телдәрендә наҙлана.

Башҡортостаным – илем!
Минең шанлы елем,
Уландарың һинең данлыҡлы.
Батыршалар, Кинйә,
Салауаттар...
Бармы улар кеүек арҙаҡлы
Уландары башҡа халыҡтың?

Башҡортостаным – илем!
Минең салт аяҙ көнөм,
Шатланам мин һиндә йәшәгәнгә,
Башҡорт милләтенән булғанға.
Башҡортостаным – илем!
Атайсалым һин минең,
Йырҙарым да һинең турала.

**Гөлдәр ШӘРИПОВА,**
**Хәйбулла районының**
**Бүребай мәктәбе уҡыусыһы.**



## Ҡар бабай

Ошо миҙгел килеп етһә,
Һәр кем яһай Ҡар бабай.
Өс түңәрәк ҡуйып ҡуйһаң,
Һәр кем һоҡланып ҡарай.

Тағы ла өҫтәргә кәрәк
Аяҡтарҙы һәм дә ҡул.
Танауына кишер ҡуйһаң
Бигерәк матур булыр ул.

Онотмаҫһығыҙ тағы ла
Баш кейемен – биҙрәнән.
Шунан өйгә ингәс тә үк
Ҡарарһың һин тәҙрәнән.

**Айсинә ЙОСОПОВА.**
**Бөрйән районының**
**Байназар ауылы.**

## Аҡмулла

Йән бармы? – ти шул Аҡмулла, йәне көйөп.
Бар әле, бар уның һүҙен тыңлағандар.
Яҡтылыҡҡа өндәп әйткән ошо һүҙҙәр
Нисек инде иғтибарһыҙ юғалһындар?

Аҡыл менән йәшәй белеү бик-бик кәрәк,
Аҡыл торһон маяҡ булып барыр юлда.
Ахмаҡтарҙан яфа сигеп йәшәмәйек,
Таянайыҡ яҡшы менән аҡыллыға.

Беҙҙең дәүер бик яуаплы, еңел түгел
Менеүҙәре был тормоштоң үрҙәренә.
Аҡмулланың аҡ һүҙҙәре – бәхет юлы
Етһә ине һәр береһенең йөрәгенә.

**Фирүзә ВАХИТОВА.**
**Салауат районының**
**Малаяҙ ауылы.**



## Маҡтансыҡ әтәс

Әтәс йөрөй ҡыптырлап,
Ҡыҙыл итеген ҡарап.
Ҡыҙыл итек килешә,
Тауыҡтар ҙа бейешә.

**Ильмира МАНАПОВА.**
**Асҡын районының**
**Солтанбәк ауылы.**

## Айыу

Ҡыш көнө айыу
Йоҡлай өңөндә.
Уға бик йылы
Ерҙең ҡуйынында.

Асыҡһа айыу
Яткан ерендә,
Табанын имә
Йылы өңөндә.

**Гөлйөҙәм СУРИНА,**
**Хәйбула районының**
**Әбеш мәктәбе уҡыусыһы.**







Хат-Хәбәр

АМАНАТ

# Йырауҫы олатай

Һәр төбәк үҙенең төрлө өлкәләрҙә ҙур уңышҡа өлгәшкән шәхестәре менән дан тота. Мәҫәлән, билдәле шағир Ҡәҙим Аралбай, “Башҡортостан ҡыҙы” журналы баш мөхәррире Йомабикә Ильясова, оҫта ҡурайсы Ишморат Илбәков – Хәйбулла районының даны, ғорурлығы.

Мин иһә районымдың, республикамдың бәҫен арттырған күренекле шәхес – Ҡаҙаҡбаев Мөхәмәтйән олатай тураһында яҙмаҡсымын. Ул Һаҡмар-Наҙарғол ауылында тыуған. Йәшләй етем ҡалып, “кулак балаһы”ның ауыр михнәттәрен күреп үҫә. Олатай – Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.

Мөхәмәтйән Абдулла улы республикаға билдәле сәсән, йыраусы. Әсәһенән мираҫ булып ҡалған йырҙарын, риүәйәттәрен, бәйеттәрен ул йәш быуынға еткерергә тырыша. Шуға ла ул Һаҡмар-Наҙарғол башланғыс, Әбеш урта мәктәптәренең көтөп алған ҡунағы.

Олатай республика кимәлендә үткәрелгән төрлө конкурс, фестивалдәр лауреаты. Ул алыҫ Японияға барып башҡорт көйҙәрен яңғыратып ҡайтҡан кеше. Оло булыуына ҡарамаҫтан, һаман да балалар менән тығыҙ бәйләнеш тота. Төрлө байрамдарҙа, кисәләрҙә үҙенең ҡобайырҙары, бәйеттәре менән сығыш яһай, аҡыллы кәңәштәре менән уртаҡлаша.

**Дилә ЮНЫСОВА,**
**Хәйбулла районының**
**Бүребай мәктәбе**
**уҡыусыһы.**

# Бөрйәнем



Һәр кемдең тыуған ере тыуған йортонан, ауылынан, районынан башлана. Миңә лә тыуған ерем Башҡортостан тап беҙҙең өйөбөҙҙән башланған кеүек.

Йортобоҙ урамдың иң осонда, урман ситендә урынлашҡан. Өйөбөҙ ултырған урын тау һырты, ике яғында йырындар, ә йырындарҙа ескәй генә йылғалар аға. Беҙҙең эргә-тирәлә муйыл, йүкә, ҡарағай, ҡайын һәм башҡа ағастар үҫә. Яҙҙың бер осоронда ап-аҡ сәскәле муйылдар күҙҙең яуын алһа, йәй башында хуш еҫтәр таратып йүкә сәскә ата. Уның сәскәләрен өҙөп алып имергә яратам. Файҙаһы ҙур икәнен әсәйем әйткәндән беләм. Көҙ көндәрендә эргә-тирәбеҙгә төрлө төҫтәге япраҡтар яуа. Тәбиғәт һәр ваҡыт матур, ә беҙ шул хозурлыҡтың эсендә йәшәйбеҙ. Юҡҡа ғына: “Башҡортостан затлы йөҙөк икән, шул йөҙөктөң ҡашы – Бөрйәндер” тип әйтмәгәндәрҙер.

Районыбыҙ Шүлгән мәмерйәһе, курсаулыҡтары менән бөтөн илгә билдәле. Беҙгә килеп, Бөрйән хазиналарын күрергә теләүселәр йылдан-йыл ишәйә. Бай тәбиғәтебеҙ үҙенең ҡырағай бал ҡорттары йыйған солоҡ балы менән тыуған еребеҙҙе данлай.

Районыбыҙ халҡы менән дә хаҡлы ғорурлана ала. Ғүмерен тыуған иленә бағышлаған күренекле шәхестәре, һәләтле кешеләре күп уның.

Мин етенсе синыфта белем алам. Аҡыллы, тәртипле, уңған ҡыҙ булып үҫергә тырышам. Заманаға ярашлы, һәр яҡлап үҫергә теләйем. Әлеге ваҡытта яҡшы уҡырға, мөмкин тиклем күберәк белем алырға ынтылам.

Тыуған йортом, мәктәбем, йәшәгән ауылым – барыһы ла яратҡан илемдең бер өлөшө. Тыуған илемдең киләсәге лә ҡотло булһын.

**Нурания ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылы.**

# Спорт һөйөүсе ғаиләм

Ғаиләбеҙ ете кешенән тора. Атайым – Айҙар, әсәйем Дилбәр исемле. Беҙҙең ғаилә фермер хужалығы менән шөғөлләнә. Ҡала һәм ауыл халҡын ит һәм себештәр менән тәьмин итә. Ғаилә менән спортҡа ла һәләтлебеҙ.

Атайым менән Рудольф ҡустым көрәште үҙ итә. Улар төрлө ярыш һәм һабантуйҙарҙа призлы урын яулай. Әсәйем еңел атлетиканы ярата, Сандра һәм Олимпия һеңлеләрем менән стадионда йүгерә.

Ләйсән апайым менән беҙ дүрт йыл инде Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Сергей Черепенкин етәкселегендә ауыр атлетика менән шөғөлләнәбеҙ. Республика һәм Рәсәй кимәлендә үткән төрлө ярыштарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулайбыҙ. Апайым Рәсәй буйынса спорт мастеры нормативын үтәне. Ул былтыр Пенза ҡалаһында һәм Татарстанда үткәрелгән ярыштарҙа 3-сө урынға лайыҡ булды. Иң һөйөнөслөһө – Ләйсән апайым 2010 йылда Испанияла беренсе тапҡыр балалар өсөн үткәреләсәк олимпия уйындарында ҡатнашасаҡ!

Спорттан тыш, йыр-бейеү менән дә дуҫбыҙ. Мин үҙемдең төрлө яклап һәләтле һәм татыу ғаиләмде яратам.

**Сажидә МӘХИЙӘНОВА,**
**Белорет ҡалаһының**
**21-се мәктәбе уҡыусыһы.**

# Атайым менән донъя йәмле

Минең атайым, Ғәйнетдин Ғәзиз улы, Ҡунаҡбай ауылында күп балалы ғаиләлә алтынсы бала булып донъяға килә. Бәләкәйҙән ныҡыш, тырыш, эшһөйәр булып үҫә.

Молокан мәктәбен тамамлағас, клуб мөдире, фуражсы булып эшләй. Юғары белем алыу теләге уны Мәскәү технология институтына алып килә. Уҡыған йылдарында ата-әсәһенә ауырлыҡ һалмайым, тип, төрлө эштәрҙә эшләп, үҙ көнөн үҙе күрә атайым. Әрме хеҙмәтенә лә барып ҡайтырға өлгөрә ул.

Ҡулына диплом алғандан һуң, районда дәртләнеп эшкә тотона. Һигеҙ йыл эшләгәс, “Ватан” ауыл хужалығы кооперативын булдыра, игенселек һәм йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә башлай. Ҡымыҙ, колбаса етештереү цехтары аса. Ошо йылдар эсендә ул үҙен аныҡ фекер йөрөткән, ғәҙел, эшсән, тормош һынауҙарына ҡаршы торорға күнеккән ир уҙаманы итеп танытты. Атайым ниндәй генә эшкә тотонһа ла, бар күңелен, һәләтен биреп эшләй. Уның өлгөрлөгөнә, бөтмөрлөгөнә таң ҡалырлыҡ.

Уға хас сифаттарҙың тағы береһе – ярҙамсыл булыу. Яҡындарына ла, сит кешеләргә ҡарата ла мәрхәмәтле ул. Олоно оло, кесене кесе итә белә. Ата-әсәһенә ҙур итеп өй һалып бирҙе. Хәҙер олатайым менән өләсәйем ҙур, яҡты, бөтә уңайлыҡтары булған йортта йәшәй. Кинйә малай булараҡ, атайым уларға ярҙам итеүҙе үҙ өҫтөнә алған: аҙыҡ-түлек ташый, мунса яғып индерә, ауырып китһәләр, дауаханаға алып бара.

Ҡәҙерле кешебеҙ ата-әсәһенә генә түгел, үҙенең ҡул аҫтында эшләгән һәр кешегә иғтибарлы. Изгелекле булғас, халыҡ та уға ылығып бара. Һалҡын шишмә ауылы халҡы уны хөрмәтләп, депутат итеп һайлап ҡуйҙы. Атайым мәктәпкә һәм балалар баҡсаһына бағыусылыҡ ярҙамы күрһәтә. Тырыш хеҙмәте өсөн ул Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов ҡулынан Рәхмәт хаты ла алып ҡайтты.

Ғаиләбеҙҙә атайыбыҙҙың абруйы ҙур. Ул, әлбиттә, махсус китаптар уҡып, беҙҙең менән шөғөлләнеп ултырмай, ләкин аңбелемебеҙҙе, зиһенебеҙҙе байытыу, физик яҡтан үҫтереү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе булдыра. Бик күп гәзит-журналдар яҙҙыра. Беҙҙе музей, концерт, спектаклдәргә алып бара. Ҡышын саңғыла шыуабыҙ, йәй көнө велосипедта йөрөйбөҙ. Бассейнда йөҙөү менән шөғөлләнергә лә ваҡыт ҡала.

Әсәйем:“Атайығыҙ ни әйтер?”, “Атайығыҙ менән һөйләшербеҙ” кеүек һүҙҙәрҙе йыш әйтә. Был ир кешенең ғаиләлә абруйы ҙур тигән һүҙ.

Атайымдың күп ваҡыты үҙе етәкләгән хужалыҡта үтә. Уның эше ауыр һәм яуаплы икәнен яҡшы аңлайбыҙ. Шуға ла мәшәҡәт тыуҙырмаҫҡа, күңелен төшөрмәҫкә тырышабыҙ.

Һеңлем менән беҙ уны бик яратабыҙ, эштән ҡайтыуын һағынып көтөп алабыҙ. Шундай атайыбыҙ булыуға ғорурланабыҙ.

**Айгизә МӨХӘММӘТОВА,**
**Күмертау ҡалаһының**
**1-се гимназияһы**
**уҡыусыһы.**

## Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА



## Эй яҙмышым минең — Башҡортостан

Башҡортостан,
Һине аңлау өсөн
Далаларың кеүек киң күңелле,
Йылғаларың кеүек моң — һағышлы,
Урмандарың кеүек мең балҡышлы,
Ҡаяларың кеүек бейек, серле
Булыу кәрәк,
Ерем — Башҡортостан!

Башҡортостан,
Һине аңлау өсөн,
Илкәйем, тип ярһып, ҡылыс болғап, —
Дауам иткән шулай нисә быуат, —
Һинең менән бергә яу сабырға,
Дарға аҫылырға, сабылырға,
Үлдем, тигәс, ҡабат терелергә,
Урал батыр булып әүерелергә
Кәрәк,
Эй яҙмышым минең —
Башҡортостан!

Йырҙарыңды ергә күмһәләр ҙә,
Ҡурай булып сәскә атҡан йырың.
Телкәйеңде ҡырҡып алһалар ҙа —
Үткерлеге уның ҡылысында,
Ә ҡылысың һәр саҡ ҡул осонда
Булған борон,
Утта янмаҫ,
Һыуҙа батмаҫ йырым минең —
Башҡортостан!
Һәр бер көнөң моңдоң өнө, гүйә.
Аҡһаҡалдарыңдың аҡылы ла,
Сабый хыялының ялҡыны ла,
Хәләл икмәк менән хәләл тоҙоң,
Һүнгән, балҡыясаҡ һәр йондоҙоң —
Йәншишмәләй генә моңдарыңда.
Уттан сыҡҡан һәр бер һүҙең,
Һәр һүҙеңдә балҡый якты йөҙөң,
Эй тормошом минең —
Башҡортостан!

## Һуңғы сара

Офоҡ арттарында яңы офоҡ —
Аҡтыҡ көсөң туплап барып ҡара,
Алыҫ түгел ара, алыҫ түгел,
Яңы офоҡ булһа һуңғы сара.

Упҡын төптәрендә яңы упҡын,
Аҫҡа эймә башың, күккә ҡара!
Теш-тырнағың менән ергә йәбеш,
Упҡын әйтһә: "Мин, — тип, —
һуңғы сара!"

Яраларың асма, ҡанһыратып,
Яра эстәрендә яңы яра.
Ҡояш нуры, көндөң яктыһылыр —
Яраларҙы баҫыр һуңғы сара!

Бәхет, мөхәббәткә һуң түгелдер,
Ваҡыт туктамаған — алға бара!
Оҙонайтһа икән ғүмереңде
Һуңғы һулыш, һуңғы аҙым,
һуңғы сара.

***

Ҡисерә бел, тимен, кешеләрҙе,
Тау илендә ҡая данлана.
Ҡыуан елгә асыҡ далаларҙан
Урал ҡаяларын даулама!
Ҡисерә бел, тимен, кешеләрҙе,
Сағым ғына — тауҙар далала.
Йөрәгеңә ятҡан ҡаяларҙан
Дала киңлектәрен даулама.
Ҡисерә бел, тимен, кешеләрҙе,
Серен систем, тимә урмандың.
Ҡисә-кисә ҡара урмандарҙы,
Серҙәренә генә уралдым.

Ҡисерә бел, тимен, кешеләрҙе,
Кем күргән һуң төбөн диңгеҙҙең?
Һиңә диңгеҙ бары хыял ғына,
Ул түгел бит йәндәш игеҙең...

Ҡисерә бел, тимен, кешеләрҙе,
Үҙ-үҙемә әйтәм ҡабатлап.
Хәҡиҡәт ул — һинең миһырбанлыҡ,
Һин дә түгел ләкин аҡтан-аҡ!

## Бүҙәгем

Был донъяның ығы-зығылары
Тамам үтеп бөткәс үҙәккә,
Бала саҡка кире ҡайтҡан кеүек,
Мин ашҡынып ҡайтам Бүҙәккә.

Ҡаршы ала яҙын сейәләре
Юлдарыма һибеп сәскәһен,
Әйткән кеүек улар:
"Сәскәләргә
Күмелеп кенә ерҙә йәшә һин!"

Көҙөн һығылғанда сейәләре
Күҙҙең яуын алыр уңыштан,
Тормош матур һәр бер миҙгелдә, тип
Уларға бит йырлап һүҙ ҡушам.

Тыуған ерҙән килә
Бар матурлыҡ,
Бөтөн якшылыктар беҙҙәге,
Тыуған нигеҙемде һаҡлайһың һин,
Атай-олатайымдың Бүҙәге.

Сәскәләрең менән ҡаршылайһың,
Сәскәләрҙә — һинең йөҙҙәрең.
Ҡайҙа йөрөһәм дә,
Минең өсөн
Ер үҙәге һин ул, Бүҙәгем,
Ер күсәре һин ул, Бүҙәгем!

## Ватаным

Ҡоштар оса тағы йылы эҙләп,
Күрә алырмынмы ҡайтҡанын?
Күкрәгеңдән моңдар китмәһен, тип
Һине уйлайым мин, Ватаным.

Күрә алырмынмы таң атҡанын,
Ҡарап ҡалам ҡояш батҡанын.
Йөҙҙәреңдән нурҙар китмәһен, тип
Һине уйлайым мин, Ватаным.

Хушлашыуҙар һала һағыштарға,
Ҡарап туймам һыуҙар аҡҡанын.
Ергенәмдең көсө китмәһен, тип
Һине уйлайым, мин, Ватаным.

Күрә алырмынмы йәшендәрҙең
Яңы яҙҙар алып ҡайтҡанын?
Йәшел ҡыяҡ яраларың тегер...
...Һине уйлайым мин, Ватаным.

## Сабыйға теләк

Мин үҙем дә йәш әсәләй —
Бәпес туйында.
Илем, телем һәм өммәтем —
Өмөт-уйымда.

Мин теләйем һиңә, сабый,
Өс бәхет — өс таж,
Ул таждарҙы күтәрерлек
Көс, аҡыл һәм баш.

Батша тажы таман булыр —
Хужа бул илгә!
Тажһыҙ хужа таҙ ғына ул:
Нужалар бөгә.

Ҡурай тажы оҙата барһын
Ғүмер юлында,
Моңдарҙан ҡылыс та ирей,
Ул моң — тынында.
Һөйгән кешең һөйһөн һине,
Һүҙҙәр тажын ул
Бағышлаһын һиңә генә,
Мәңге ғашиҡ бул!

Үҙеңдең дә теләктәрең
Бик тиҙҙән тыуыр,
Ә әсәйең һине: “Үҫ” — тип,
Саф һыуҙа йыуыр.

## Хәлең нисек, балам?

Барып етермен мин һиңә, балам,
Юл булмаһа — ҡара урман киҫеп.
Хәбәр генә ебәр, хәбәр ебәр,
Хәлең нисек, балам, хәлең нисек?

Ҡара таңдан ҡара төнгә тиклем
Уйымда — һин,
Балаҡайым, ишет!
Тауҙар ярып барып етермен мин,
Хәлең нисек, балам, хәлең нисек?

Туфан баҫҡанда ла донъяларын
Барып етермен мин даръя кисеп.
“Ҡайғы һалам, — тимә, — әсәйемә”,
Хәлең нисек, балам, хәлең нисек?

Булһаң да һин офоҡ аръяғында,
Ғүмерлеккә һиңә — йәнем бишек.
Хәбәр генә ебәр, хәбәр ебәр,
Хәлең нисек, балам, хәлең нисек?

## Һынайһың һин, Раббым!

Тоғролоҡто минең был тормошҡа
Бала саҡтан, Раббым, һынайһың;
Һынай торғас шундай хәлгә еттем:
Бар донъяны ҡурсар Һомаймын.

Күк батшаһы Самрау менән Ҡояш
Тыуҙырғандар мине, әйтерһең;
Әсәйлегем миңә көс биргәнгә
Үҙемә лә ҡай саҡ сәйермен.
Бала, тиеп тереләй утта янам,
Янған һайын — үҙем сыныҡам.
Янар уттан күпме яҙмыштарҙы
Ҡосағымда алып сығылған?!

Рәхмәт көтмәйем мин бер кемдән дә,
Кешеләргә ҡылған ғәмәлем
Балаларға ҡайтһын бәхет булып —
Иркенәйер генә ғаләмем.

Һомайғоштоң ҡанаттары туҙмай,
Тик көсәйә бара йәшәүҙән.
Әкиәттә, тимә, Һомайғоштар,
Ҡара миңә:
Ысын, йәшәрәм,
Балаларым быуын ныҒытҡанда;
Ҡояш сыға шуға — мин көлһәм.
Раббым һынар бер көн әжәл менән,
Һуңғы һүҙем булыр:
“Их, белһәм...”

## Күрһәтмәһен бала ҡайғыһын!

Теле телгә йоҡмай һандуғастың,
Һайрауҙары — йөрәк ҡағышы.
Алғыштарын моңдарына һала:
“Күрһәтмәһен бала ҡайғыһы!”

Инәһенән алда саба ҡолон,
Уйнағыны килә, еләһе.
“Күрһәтмәһен бала ҡайғыһы!” — тип
Күҙен алмай унан инәһе.

Әсә теләй,
Йоҡлағанда бәпес,
Тойоп уның күкрәк йылыһын:
“Күрһәтмәһен бала ҡайғылары,
Бәхеттәре менән ул тыуһын!”

Мин үҙем дә,
Ҡояш ҡалҡыу менән,
Һайрағандай моңло таң ҡошо,
Бар донъяға алғыш оҙатамын:
“Күрһәтмәһен бала ҡайғыһы!”

## Тамырыңды бел!

# МИНЕҢ НӘҪЕЛЕМ

Башҡорттар элек-электән үҙ ырыуының тарихын яҙып ҡалдыра барған. Уны ағас һымаҡ төшөргән һәм шәжәрә (ғәрәпсә “ағас”) тип атағандар. Ағас боронғо башҡорттарҙа өс донъяны – һауаны, ерҙе, ер аҫтын берләштереүсе символ булған. Ағастың тамыры – үткәнебеҙ, олоно – бөгөнөбөҙ, тармаҡ-ботаҡтары – киләсәгебеҙ.

Башҡорт телендә “тамыр” һүҙе бик ҙур мәғәнәгә эйә: ул һине, кем генә булыуыңа ҡарамаҫтан, ер менән туранан-тура бәйләп тороусы. Тамыр – ул тыуған илең дә, әсә телең дә, атай-олатайҙарың да. Нәфис кенә сәскәме, йөҙйәшәр ғорур ағасмы, әллә кешеме – барыһы ла тамыры ныҡ булғанда ғына бер нигә бирешмәй йәшәй ала.

Бына мин үҙемдең шәжәрәмә ҡарайым да, шул һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә иманам. Үҙен башҡорт һанаған кеше ете быуынға тиклем нәҫелен белергә тейеш булған. Ата-бабаларым ошо изге аманатҡа тоғро ҡалып, шәжәрәһен тултыра барған. Мин дә, нәҫелем менән ҡыҙыҡһынып, атайым һәм олатайымдан күп мәғлүмәттәр белдем.




Бына, мәҫәлән, олатайымдың атаһы Миңлеғәле Ниғмәтулла улы Әхмәтйәнов Урал ауылына нигеҙ һалыусыларҙың береһе булған. Аҙаҡ ауыл исеме менән “Урал” колхозы ойоштоорла. 1932-39 йылдарҙа Миңлеғәле олатайым ошо “Урал” колхозына етәкселек итә. Тырышып эшләп йөрөгәндә, уны район Советына эшкә үрләтәләр.

1942 йылдың көҙөндә ул һуғышҡа алына. Өлкән политрук булып хеҙмәт иткән олатайым 1943 йылдың февралендә Сталинград өсөн барған ҡан ҡойош алыштарҙың береһендә батырҙарса һәләк була.

Уның улы Әхмәтйәнов Рәшит Миңлеғәле улын да яҙмыш ергә “бәйләп” ҡуйҙы – ул 1970-90 йылдарҙа “Коммунар” колхозын етәкләй. Уның ниндәй абруйлы, ныҡышмал етәксе булыуы тураһында түшендәге бик күп орден һәм миҙалдары һөйләй. Туғыҙ тапҡыр район Советына, ун ике мәртәбә ауыл Советына депутат итеп һайланған. 1980, 1993 йылдарҙа ике тапҡыр Башҡорт АССР-ның Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнгән. Ул 1998 йылдан алып Иманғол ауыл Советы янындағы ветерандар советы рәйесе.

Ә атайым Рөстәм Рәшит улы Әхмәтйәнов 1994 йылда ауыл хужалығы институтын тамамлап, милицияға эшкә урынлаша һәм әлеге көнгә тиклем шунда эшләп йөрөй. Уны коллегалары хөрмәт итә. Ә мин атайым менән бик тә ғорурланам.

Үҙебеҙҙең шәжәрәгә ҡарайым да, ҡыуанып ҡуям. Данлыҡлы, хөрмәтле кешеләр булған ата-балаларым. Шәжәрәне өйрәнеү миңә халҡыбыҙҙың тарихын да белергә ярҙам итә. Минең тамырым ныҡ. Ә тамырһыҙ кеше ерҙә ышаныслы баҫып тора алмай, быуынһыҙ, рухһыҙ була. Шағирә Гөлфиә Юнысова бал турала:

*Тамырһыҙҙы*
*ел осора,*
*Тамырһыҙ*
*– һыуҙа серей,*
*Ерҙә лә урын*
*табалмай,*
*Мәңге*
*ҡағырып йөрөй, –*

тип яҙған. Ниндәй генә заманда йәшәмәһен, ҡайҙа ғына йөрөмәһен, һәр кеше үҙенең, ата-бабаларының, халҡының үткәнен онторға тейеш түгел. Шуға беҙ ҙә, киләсәктең хужалары, үҙебеҙҙең быуыныбыҙҙы, йәғни, тамырҙарыбыҙҙы белеп үҫәйек.


**Айбар ӘХМӘТЙӘНОВ,**
**Учалы ҡалаһы 12-се Башҡорт лицейының 6-сы синыф уҡыусыһы.**




# Өс исемле ауылда йәшәйем

Мин Әбйәлил районының Ырыҫҡужа ауылында йәшәйем. Атайым, Рим Нурмөхәмәт улы Яхин “Ырыҫҡужа ауылы тарихы” тигән китап яҙҙы. Ул 2003 йылда донъя күрҙе. Шул китаптан алып, ауылымдың ҡыҫҡаса тарихын “Аманат” уҡыусыларына ла еткергем килде.

Тамъян ырыуы башҡорттары йәшәгән Ырыҫҡужа ауылының бай йөкмәткеле тарихы бар. Ауылым элек икенсе ерҙә урынлашҡан булған. Ул ерҙе хәҙер “Иҫке урын” тип атайбыҙ. Элекке ауылды карателдәр яндырғанға күрә, ырыу башлығы Һәүбән ҡарт кешеләрҙе хәҙерге урынға күсергән.

Минең ауылымды икенсе төрлө “Өс исемле ауыл” тип йөрөтәләр. Иң беренсе ул ырыу башлығы Һәүбән ҡарт исеме менән йөрөгән. Ә икенсе исемен алыуының тарихы бик ҡыҙыҡ. Ҡасандыр Ырыҫҡужа ауылы кешеһе урыҫ-япон һуғышынан батырлыҡ күрһәтеп, Георгий тәреһе кавалеры булып ҡайтҡан. Шуға ауылымды тағы “Япония” тип тә ебәрәләр. Өсөнсө исеме Ырыҫҡужа Ҡармаевҡа бәйле.



Ауылыма яҡын ғына “Әбей ояһы” тип аталған урын бар. Ул ерҙән сылтырап шишмә ағып ята. Ҡасандыр, бөтөн ауыл күсенеп йөрөгәндә, бер әбей шул ерҙә йәшәгән булған.

Тағы ла “Өмөкәй” ҡоҙоғо бар. Ул ҡоҙоҡто бик борон Өммөкамал исемле ҡатын ҡаҙған. Уның һыуы таҙа, саф һәм шифалы.

Минең ауылымда тыныш, эшсән кешеләр йәшәй.

**Айгөл ЯХИНА.**

**ҺҮРӘТТӘ: ауылымда ҡышҡы таң.**

# Ауылым - Әбүбәкер

Хайбулла райнының Әбүбәкер ауылына 1656 йылда Яйыҡ йылғаһы буйлап һуҙылған Рәсәйҙең көнсығыш сиген һаҡлауҙа ҡатнашҡан есаул Әбүбәкер Хоҙайназаров тарафынан нигеҙ һалына. Ул Үҫәргән ырыуынан Шешәй түбәһе башҡорттары араһында ҙур түрә һаналған.

Әбүбәкер ауылында бөгөн дә ситтән күсеп килеүселәр юҡ, бөтөн кешеләр ҙә бер тамырҙан таралған. Әбүбәкиров, Назаров, Аҡназаров, Билалов, Балдыбаев, Әлибаев, Аҡыловтарҙың ҡарт олаталары Мөйтәле, ошо фамилияларҙы йөрөтөүселәр барыһы ла Мөйтәленең быуындары була. Улар барыһы ла Шешәй түбәһенә ҡараған Үҫәргән ырыуы кешеләре.

Хәҙерге көндә Әбүбәкер ауылында 170 йорт иҫәпләнеп, 600-ҙән ашыу кеше йәшәй. Ауылда мәктәп, мәҙәниәт йорто, медпункт, балалар баҡсаһы бар.

**Райхана АҠЪЮЛОВА.**

**Хәйбулла районының Әбүбәкер ауылы.**

***P.S. Ауылым тарихын өйрәнеүҙә ярҙам күрһәткән Марат Сабирйән улы Мәмбәтовҡа ҙур рәхмәтемде белдерәм.***

# “Аулаҡ өй”

*Сценарий өлгөһө*

***Өләсәй бәйләм бәйләй. Ейәнсәре кайта. Сәй тәкдим итә. Ялағайлана, сөнки кыҙҙар-егеттәрҙе аулакка саҡырып ҡайткан.***

**Ҡыҙ:** Өләсәй, самауыр ҡайнаған, сәй эсәһеңме?

**Өләсәй:** Юҡ, балам, рәхмәт, әле генә эстем бит.

**Ҡыҙ:** Өләсәй, һине Сабира инәй килһен, тигәйне, бармайһыңмы ни?

**Өләсәй:** Бөгөн түгел, иртәгә барырмын, ҡыҙым.

**Ҡыҙ:** Өләсәй, ни... мин әсәйҙәр өйҙә юкта ҡыҙҙарҙы саҡырғайным, килһендәрме?



**Өләсәй:** Шулаймы?

**Ҡыҙ:** Эйе, ҡыҙҙарҙы, кыҙҙарҙы ғына, өләсәй.

**Өләсәй:** Тәртипле генә ултырығыҙ, йәме?!

***(Ҡыҙҙар тауышы ишетелә)***

**Ҡыҙ:** Өләсәй, ана, ҡыҙҙар килде. Ишекте асам инде, йәме, өләсәй...

***(Ҡыҙҙарҙы каршы ала, улар инәй менән иҫәнләшеп, күстәнәстәрен бирәләр. Ҡыҙҙар, йыйылышып бөткәс, өләсәйҙе һырып алалар.)***

**Бер кыҙ:** Кыҙҙар, әйҙәгеҙ, бейешеп алайыҡ.

– Әйҙә!

– Әйҙә, бейейек!

– Нимәгә бейейбеҙ?

– “Шәл бәйләнем”гә.

***(Ҡыҙҙар “Шәл бәйләнем” йырын йырлай башлай, дүрт кыҙ уртаға төшөп бейей. Бейеп бөткәс, бер кыҙ өләсәй янына йүгереп килә.)***

**Ҡыҙ:** Өләсәй, бәләкәй сактан бире шундай матур әкиәттәр һөйләй инең, тағы берәй ҡыҙыҡлы хәл һөйлә әле.

**Өләсәй:** Шулаймы? Нимә һөйләйем икән һеҙгә?

– Берәй батыр тураһында!

– Маянһылыу тураһында!

– Анау, ни... Мөхәббәт тураһында!

**Өләсәй:** Мөхәббәт тураһындамы? Тыңлағыҙ, улайһа.

Борон-борон заманда хан ҡыҙына көтөүсе егет ғашиҡ була. Ә ҡыҙыкай шундай сибәр, шундай тәкәббер икән. Ул егеткә шарт ҡуя:

– Әгәр ҙә яратаһың икән, миңә әсәйеңдең йөрәген алып кил! – ти.

Егет ҡыҙҙың шартын үтәргә риза була. Ул әсәһенең йөрәген усына һалып, һөйгәне янына китеп барғанда, абынып йығыла. Шул саҡ йөрәк телгә килә лә:

– Ауыртынманыңмы, балаҡайым? – тип өндәшә...

Бына шулай, балалар, әсә йөрәге шул тиклем ғәжәп һәм бөйөк ул. Атай-әсәйҙәрегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ.

***(Гармун тауышы ишетелә)***

**Ҡыҙҙар:** ***(бышылдашып)*** Егеттәр килә, егеттәр!

**Ҡыҙ:** Өләсәй, тамағың кибеп киткәндер, әйҙә, аласыҡка сығып, сәй эсеп ал.

**Өләсәй:** Әй, рәхмәт төшкөрө, балам. Шулай итәйем, балаҡайҙарымдың күстәнәстәре менән сәй эсеп алайым.

***Ике ҡыҙ өләсәйҙе алып сығып китә.***

***Егеттәр сәхнәгә менә торған баҫҡыс янына килеп етә. Береһе сәхнәгә менеп ҡарай.***

– Бикле.

– Ҡыҙҙар, ишек асығыҙ!

– Ҡыҙҙар, тим!

– Асығыҙ инде!

– Ни эшләйбеҙ?

– Ватабыҙ!

– Улай ярамай!

– Нисек астырабыҙ?

– Таҡмаҡ йырлайбыҙ!

**Егеттәр:**

Ағиҙелгә баҫма һалдым
Тар булды, төшә күрмә,
Һағыныуҙар елкендерә,
Ҡом булып оса күрмә.

**Ҡыҙҙар:**

Алын алырһығыҙ микән,
Гөлөн алырһығыҙ микән.
Урталарға сығып һайлап,
Кемде алырһығыҙ икән.

**Егеттәр:**

Алдарын да алырбыҙ,
Гөлдәрен дә алырбыҙ,
Күңелебеҙгә кем оҡшаһа,
Шуны һайлап алырбыҙ.

**Ҡыҙҙар:**
Алма алырһың әле,
Алмай ҡалырһың әле.
Күп ҡыҙҙарҙы һайлап йөрөп,
Яңғыҙ ҡалырһың әле.
**Егеттәр:**
Алма бирҙем – алманың,
Тәңкә бирҙем – таҡманың.
Түшең киреп йөрөй инең,
Әллә кемде тапманың.
**Ҡыҙҙар:**
Арғы остан осҡан ҡаҙҙы
Бирге яҡта һанайбыҙ.
Егеттәрҙең ялҡауҙарын
Бер күреүҙә һынайбыҙ.
**Егеттәр:**
Алтын ҡаплы, көмөш баулы,
Сәғәтем бар түшемдә.
Бер ятҡанда ике күрәм
Һин йәнемде төшөмдә.
**Ҡыҙҙар:**
Тәҙрәнән ҡарама,
Бүректәрең алама.
Баҙарға бар, еп һатып ал,
Өҫ-башыңды ямарға.
**Егеттәр:**
Ай-һай, ҡыҙыл бирсәткә,
Ҡулдарымда булһасы.
Ай-һай, ҡыҙҙар уйыны,
Иртә лә кис булһасы.
**Ҡыҙҙар:**
Аҡ яулыҡтар бөтә, тиҙәр,
Алып ябынып ҡалайыҡ.
Йәш ғүмерҙәр үтә тиҙәр,
Уйнап-йырлап ҡалайыҡ.

***(Ҡыҙҙар ишектә аса, егеттәр инә. Парҙарына бүләктәр тапшыралар.)***

– Тормағыҙ әле шыш-быш килешеп, әйҙәгеҙ, берәй уйын уйнап алайыҡ.
– Ниндәй уйын, ниндәй?
– Әйҙә, "Шишмә"* уйынын уйнайыҡ!
– Әйҙә, уйнайыҡ!
– Әйҙә!
– Әйҙә!

***(Йәштәр парлашып уйнай башлай. Наказдарға ике концерт номеры күрһәтелә)***

– Эй, арып киттем.
– Мин дә арыным.
– Мин дә арыным.
– Әйҙәгеҙ, улайһа, икенсе бер уйын уйнайыҡ!
– Нимә уйнайбыҙ?
– "Йөҙөк һалыш" уйнайыҡ.

***(Уйын башлана. Ике рәт үтелә. Язаға, балаларҙың һәләттәренә ҡарап, тағы ике концерт номеры күрһәтелә)***

– Әйҙә, уйнап, бейеп алайыҡ!
– Ниндәй уйын уйнайбыҙ?
– "Паровоз" уйыны!
– Эйе шул, бейеп тә алырбыҙ.

***(Уйын барышында тағы ике кешегә яза бирелә, тағы ике концерт номеры күрһәтелә. Өсөнсө тапҡыр бейегәндә буталышып бөтәләр, шау-шыу ҡуба)***

– Әйҙә, бергәләп, күмәкләшеп гөрләтеп бейеп алайыҡ.
– Бейейек, бейейек.

***(Ҡыҙҙар егеттәр менән ҡапма-ҡаршы баҫып, парлашып бейей башлай. Бейеү аҙағында тыпырлашҡанда сәхнә артынан өләсәйҙең тауышы ишетелә)***

**Өләсәй:** Ҡыҙым, ҡыҙым, ниндәй тауыш ул, ни булды?

***(Сәхнәгә сыға. Ҡыҙҙар егеттәрҙе арттарына йәшерә, егеттәр иплəп кенә сығып каса)***

**Ҡыҙ:** Өләсәй, беҙ бейенек.
**Өләсәй:** Әллә берәйһе бармы, ныҡ шауланығыҙ бит.
– Беҙ үҙебеҙ генә, өләсәй.
– Бер кем дә юҡ.
– Үҙебеҙ генә.
– Һине матур бейей, тиҙәр, өләсәй, бейе әле.
– Бейе, бейе, өләсәй.
**Өләсәй:** Ҡуй, ҡуй, инде ҡасандан бейегәнем юҡ, билем дә ауыртып тора...
– Бейе инде.
– Бейе.
**Өләсәй:** Шулаймы, бейейемме?

***(Өләсәй бейергә төшөп китә. Тыштан егеттәр һыҙғыра. Ҡыҙҙар әкрен генә баҫып өйҙән сығып китә. Өләсәйҙең башы әйләнеп туҡтауға өйҙә бер кем дә булмай)***

**Өләсәй:** Бәй, ҡайҙа булғандар? Сығып та киткәндәр шул, рәхмәт төшкөрҙәре. Эй-й, йәшлек, йәшлек...**(Сығып китә).**

**Зөлфиә ҒӘЛИНА.**
**Өфө ҡалаһының**
**59-сы коррекцион**
**мәктәбе уҡытыусыһы.**

*** Уйындарҙы урындағы мөмкинлектәрҙән сығып һайларға була.**



# Рәхмәт һеҙгә!

***Коллективтың көҙрәте ниҙә икәнен һәр кем белә: “бергәнеке берәгәйле”, “эше күптең көсө күп” тигән бихисап халыҡ мәҡәлдәре һәр ваҡыт ил менән бергә көн итеүҙең, бергә-бергә йәшәү һәм эшләүҙең өҫтөнлөктәрен дәлилләй.***

Был изге йоланың һаман да көнүҙәк булып ҡалыуын беҙгә килгән хаттар ҙа иҫбатлауын дауам итә. Яңы йыл алдынан редакцияға Бөрйән районының Яңы Усман ауылынан ҡыуанысло хат килеп төштө. 84 бала уҡыған мәктәп баш ҡалабыҙҙағы, һәм республикабыҙҙағы әллә күпме “алдынғы” башҡорт мәктәптәренең танауына сиртте – улар тотош мәктәп менән “Аманат” журналына яҙылған! Бына ул берҙәмлектең ҡеүәте! Тимәк, был мәктәптә ойошҡанлыҡ көслө һәм был балалар, ниндәй генә эш булмаһын, ойошҡан рәүештә күмәкләшеп эшләргә өйрәнгән. Шундай балаларға, уларҙың уҡытыусыларына, мәктәп директоры И. Ш. Ишморатовҡа нисек ҙур-ҙур рәхмәттәренде еткермәйһең инде. Ҡайһы бер тотош районлар хатта бер Яңы Усман ауылының тиражын йыя алмай.

Шулай уҡ Әбйәлил районының Аһылай мәктәбе лә ҡыуандырҙы беҙҙе. Улар дүртенсенән һигеҙенсегә тиклем синыфтарҙың берҙәм “Аманат”ҡа яҙылыуҙары тураһында хәбәр итте. Мәктәп директоры Н. А. Булатов, синыф етәкселәре И. С. Хажиәхмәтова, Р. М. Низамиева, С. С. Булатова, А. Ж. Мәхийәнова, И. Р. Яҡуповаларҙың кескәй ауылдың бәләкәй мәктәбендә юғары рухлы кешеләр тәрбиәләү буйынса ынтылыштары оло рәхмәткә лайыҡ.

Беҙҙең өсөн тағы ла бер ҡыуанысло хәбәр – быйыл тотош синыф менән “Аманат”ҡа яҙылып, шул турала беҙгә хәбәр итеүсе хаттарҙың күп булыуы. Был йәһәттән Әбйәлил районы мәктәптәренә етеүсе юҡ. Үткән һанда ғына беҙ бер нисә синыф бер юлы “Аманат”ҡа яҙылған Байым мәктәбе тураһында хәбәр иткәйнек. Әйткәндәй, улар бер нисә йыл элек “Аманат” үткәргән “Бөтә мәктәп менән – “Аманат”ҡа!” конкурсында еңгәйнеләр. Улар артынан Әбйәлилдең Ҡырҙас мәктәбенең 7-се синыфы (синыф етәксеһе В. Н. Солтанова), Амангилде мәктәбенең 7-се (З. Х. Минһажева), 8-се (В. Ғ. Низамова) синыфтары, Үтәгән мәктәбенең 5-се синыфы (З. Н. Йәнмырҙина), Буранғол мәктәбенең 4-се синыфы (Г. С. Заһитова) тотош синыф менән ойошҡан рәүештә “Аманат”ҡа яҙылып, һөйөнсө хаттарын ебәрҙеләр.

Баймаҡтарға ла рәхмәттән башка һүҙебеҙ юҡ. Был райондың Күсей мәктәбенән 7-се синыф (Г. И. Ишбаева), Ниғәмәт мәктәбенән 5-се синыф (Ф. Ү. Яхина), Ишбирҙе мәктәбенән 3-сө синыф (Н. Ә. Кейекбирҙина) ойошҡанлыҡ, берҙәмлек өлгөһө күрһәтте. Уларға Йылайыр районының Шәйехзада Бабич исемендәге гимназияһының 5-се “А” (Ә. Ә. Тәкәйева), Хәйбулла районы үҙәге Аҡъяр ауылының 2-се мәктәбенән 4-се “А” (Л. М. Юнысова), Ғафури районы Сәйетбаба ауылының Жәлил Кейекбаев исемендәге урта мәктәбенән 6-сы (Ф. Ә. Фәйзуллина), Илеш районы Ишҡар мәктәбенән 7-се (Г. М. Саҙретдинова) һәм 5-се синыфтар (В. Р. Ғәлиханова), Бөрйән районы Байназар урта мәктәбенән 7-се “Б” синыфы (Г. М. Салауатова), Иҫке Собханғол мәктәбенән 6-сы “Б” (Э. Ф. Фәхретдинова), Ҡолғана мәктәбенән 9-сы (Ә. Х. Аралбаева), Күмертау ҡалаһының 1-се гимназияһының 6-сы синыфы (Н. Н. Хәлилова), Дүртөйлө районының Семилетка ҡасабаһынан 7-се “Б” (Ә. В. Талипова), Өфө ҡалаһынан 117-се мәктәптең 5-се (М. Н. Моратшина), Сибай ҡалаһының 1-се мәктәбенән 4-се “А” (Г. А. Мәтинова) менән 5-се “А” (С. Б. Буранғолова) Учалы районының Абҙаҡ мәктәбенән 6-сы (Т. Ә. Сәйфуллина), Әлшәй районы Ҡармыш мәктәбенең 6-сы (С. К. Шәкүрова) Мәләүез районының Смаҡ ауылының Динис Бүләков исемендәге мәктәбенең 7-се (Г. И. Хисаметдинова), 5-се (Р. Р. Байгилдина), Аптраҡ мәктәбенән 9-сы синыф уҡыусылары (Ф. Б. Мәсәғутова) ҡушылып, беҙҙе һөйөндөрөргә ашыҡҡан.

Бар уҡыусылары ла яҙылған синыфтарҙың шул хәтлем күп булыуы сәбәпле, уларҙың фотоларын баҫа алмайбыҙ, сөнки барыһына ла журналда урын бирһәк, улар журналдың яртыһын биләр ине. “Аманат”лы синыфтарҙың береһен биреп, икенсеһен бирмәү ҙә дөрөҫ булмаҫ. Тик шул сәбәпле генә уларҙың барыһының да исемен баҫыу менән сикләнергә булдыҡ. Әммә был синыфтарҙың барыһына ла “Аманат”тың Маҡтау билдәләре ебәреләсәк.

Шулай уҡ киләсәктә лә “Аманат”ҡа тотошлайы менән яҙылған һәр синыф Маҡтау билдәһе менән билдәләнәсәк.

Ә бөтөн балалары ла яҙылған һәр мәктәп хаҡында айырым яҙып сығасаҡбыҙ. Әлегә атыбыҙ Яңы Усманға юл тота.

Тағы бер тапҡыр барығыҙға ла ҙур рәхмәт. Артабан да бергә ҡалайыҡ.

Ай, һылыу!

# Йыл һылыуы-2009 – Ынйыҡай ИҘЕЛБАЕВА!

**“Ай, һылыу!” конкурсына ла йомғаҡ яһарға ваҡыт етте. 12 ҡыҙ – ай һылыуҙары араһынан еңеүсе тип бер тауыштан Өфөләге 20-се башҡорт ҡала гимназияһының V “А” синыфы уҡыусыһы Ынйыҡай Иҙелбаева табылды. Ынйыҡай зәңгәр экрандар аша йәш тамашасыларға яҡшы таныш. “Тамыр” студияһы ҡабыҙған йондоҙсоҡтарҙың береһе тиһәк, һис яңылышмабыҙ, моғайын. 5 йәшенән “Сәңгелдәк”тә катнашып йөрөнө. Хәҙер, үҫә төшкәс, Искәндәр Ғәлин, Наҙгөл Йәйкарова менән бергәләп “Сулпылар”ҙы алып бара.**



– Тапшырыуҙарҙа ҡатнашыу, төрлө образдарға инеп сығыш яһау ныҡ оҡшай. Киноактриса булыу теләге лә тап “Сәңгелдәк”тә төшә башлағас яралды. “Бәлки, тора-бара башҡа һөнәр оҡшар?” – тип һорағас, “Юҡ. Киреһенсә, йылдан-йыл нығырак хыялланам был турала. Мәктәптән һуң Мәскәүҙәге Бөтә Рәсәй дәүләт кинематография институтына уҡырға инергә теләйем”, – тине Ынйыҡай. “Киноактрисаларҙан кемдәргә һоҡланаһың?”– тигәс, “Валерия Ланская менән Татьяна Арнтгольц”, – тип яуапланы. Бер минутын да бушҡа уҙғарырға күнекмәгән был тырыш, уңған ҡыҙ, ял көндәрендә атаһы йә дуҫтары менән катокта йөрөргә ярата. Тимер аяҡтарҙа шыуырға атаһы өйрәткән. Шуға Ынйыҡайҙың боҙҙа фигуралы шыуыуҙы яратыуы бер ҙә ғәжәп түгел. Телевизорҙан спорттың ошо төрө буйынса Европа, донъя чемпионатын да күҙәтеп бара. “Беренсе каналда барған популяр шоу “Боҙло дәүер”ҙе лә һәр саҡ көтөп алам. Фигуристар Роман Костомаров, Ирина Слуцкая һәм Алексей Ягудинға һоҡланам”, – ти.

Ынйыҡай 5 йәшенән бейеү менән дә шөғөлләнә. Башта өс йыл буйына мәҙәниәт һәм техника һарайында эшләп килгән “Иҙел” ансамблендә йөрөгән. Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия бейеүҙәре ансамбленең балалар хореографияһы студияһы асылғас, шунда күсә. Илүзә Ҡаһарман ҡыҙы етәкселегендә бейеү серҙәренә төшөнә. Буй-һын, кәүҙә торошо матур булһын өсөн мотлаҡ бейеү менән шөғөлләнергә кәрәк, тип иҫәпләй. “Бөрйән ҡыҙҙары” тигән бейеүҙе әхирәттәре Камила Ғүмәрова һәм Ләйлә Ғәлиуллиналар менән бик оҫта башҡарып, танылған шағирә Гөлфиә Юнысованың ижад кисәһендә, “Сулпылар” конкурсында күптәрҙе хайран иткәндәр. Уҡыуҙа ла һынатмай, тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшә. Өйҙә әсәһенә лә ҙур ярҙамсы, 4 йәшлек Зарина һеңлеһен дә ҡараша, һауыт-һаба, иҙән дә йыуыуша.

“Ай, һылыу!” конкурсында йыл һылыуы булыуыңды ишеткәс, иң тәүге реакцияң ниндәй булды?” – тигән һорауға, Ынйыҡай:”Ур-ра!” тип ҡыҫҡырҙым. Журнал тышында сығыу күптәнге хыялым ине”, – тине.

**Нурия ӘХТӘМОВА.**

## Студент та, йәш хәбәрсе лә



Быйылғы йәш хәбәрселәребеҙ араһында БДУ студенты Нәркәс Алсынбаева ла бар. Нәркәс Баймаҡ районының Сәйғәфәр урта мәктәбендә уҡыған сағында уҡ журналға яҙышып торҙо. “Игеҙәктәр – Марста” тигән хикәйәһе өсөн редакцияның Маҡтау ҡағыҙына ла лайыҡ булғайны.

БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына уҡырға ингәс тә, яратҡан баҫмаһы менән бәйләнешен өҙмәне. Редакцияға йыш килеп йөрөнө, “Мәңгелек сер” рубрикаһына бай йөкмәткеле, үҫмерҙәрҙең зауығына тап килерҙәй мәҡәләләр ижад итте, тәүге мөхәббәт йә яуапһыҙ һөйөү утында янып ыҫыусы ҡыҙҙар һәм малайҙарға үҙенең кәңәштәрен бирҙе.

Иҫ киткес тыныс холоҡло, был авторыбыҙ тыйнаҡ матурлығы менән беҙҙең, журнал хеҙмәткәрҙәренең дә, күңелен яуланы.

– Тиҙҙән, юғары уҡыу йортон тамамлап, ҡулға диплом алырға торһам да, яратҡан журналымдан айырылырға ашыҡмайым. Был минең үҫмер ҡыҙҙар кеүек үтә хисле булыуымдан, донъяны үҙемсә ҡабул итеүемдән дә киләлер, бәлки. Йылдар үтеү менән үҙгәрһәк тә, балалыҡ хыялдары беҙҙе һәр саҡ оҙата бара. Бала саҡ иленән айырылмаҫҡа миңә “Аманат” ярҙам итә, – тине Нәркәс.

Йәш хәбәрсебеҙгә киләсәктә яңы офоҡтар, ныҡлы ҡанат нығытып, ижад донъяһының сикһеҙ күктәрен ҡыйыу иңләргә яҙһын, тип теләйек.

**Нурия ФАЗЛЫЕВА.**

Быйыл июнь айында Өфөлә үтәсәк III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын ҡаршылап, был рубрика аҫтында сыҡҡан материалдар аша беҙ “Аманат” уҡыусыларын, үҙҙәренең тарихи ерҙәрендә борон-борондан йәшәп тә, совет осоронда хәҙерге Башҡортостандан ситтә тороп ҡалдырылған милләттәштәребеҙ тормошо тураһында һөйләйәсәкбеҙ. Яҙмыш ҡушыуы буйынса сит тарафтарға үҙҙәре юлланған башҡорттарҙан тыш, үҙ иркенән башҡа ла тотош ҡәүемдәре менән республикабыҙҙан ситтә йәшәгән башҡорттар бөгөн дә туған республикабыҙҙан айырылмай, уның ярҙамын тойоп йәшәй. Улар менән милли мәҙәниәт, матбуғат, мәғариф өлкәһендә тығыҙ бәйләнеш булдырылған.

# Ғәйнәләр ере

Рәсәй ерендә яңыраҡ ҡына барлыҡҡа килгән (Пермь өлкәһе һәм Коми-Пермяк милли округы берләштерелгәндән һуң) Пермь крайы ерҙәренең байтаҡ өлөшө боронғо Ғәйнә башҡорттарының аҫаба биләмәләре булып тора.

XII быуатта уҡ ғәйнәләрҙең ошо ерҙә, Кама (Сулман), Тулва, Танып йылғалары буйлап икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙе биләп йәшәгәнлеге билдәле. 1557 йылда Рәсәй дәүләтенә үҙ ирektәре менән ҡушылып (уларҙан 1552 йылда уҡ Урак бей Иван батшаға барған), ғәйнәләр Иван Грозныйҙан үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ ярлығы ала.

Ләкин тап шул ваҡыттан һуң Ғәйнә ерҙәрен колонизациялау, баҡыр, тимер заводтары, ҡалғалар төҙөү башлана. Шул сәбәпле ғәйнәләр башҡорттар башлаған барлыҡ баш күтәреүҙәрҙә лә иҙеүселәргә ҡаршы һуғыша. Пугачев яуында, мәҫәлән, уларҙан 9 полковник, 7 атаман, 16 поход старшинаһы етәкселегендә тығыҙ мең яугирҙың ҡатнашҡаны билдәле.

Боронғо ғәйнәләрҙең иң аҫыл вәкиле булып Исмәғил Тасимов тора. 1771 йылда




уның инициативаһы һәм аҡсаһы менән Санкт-Петербургта беренсе тау училищеһы, хәҙерге Санкт-Петербург тау институты асыла. Ошонда уҡып сыҡҡан академик Соколов 1830 йылда былай тип яҙған: **”Яҙмыш ҡушыуы буйынса, беҙҙә тау эшенә өйрәтеүселәр башҡорттар булды”.** Санкт-Петербург тау институтында, тыуған яғында – Пермь крайының Ҡуян ауылында Исмәғил Тасимовҡа мемориаль таҡтаташ асылған. Шулай уҡ Аҡъяр тау колледжына ла уның исеме




бирелгән. Исмәғил Тасимовтың атаһы Тасим Мәмәтов Уралда төрлө руда эшкәртә башлаусыларҙың береһе була.

Шулай уҡ руда эшкәртеүсе, 20 йыл Ғәйнә улусының старшинаһы булып торған, Уложенный комиссия (хәҙерге Дәүләт Думаһы) депутаты Туктамыш Ишбулатов аҙаҡ Пугачев полковнигы булып китә.

Үҙ ваҡытында Дәүләт Думаһы депутаты булып торған Мансур хәҙрәт Солтанай ауылында алдынғы мәҙрәсә аса.

2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ҡарағанда, был крайҙа ул сакта 40790 башҡорт һаналған.

2007 йылда үҙҙәренең тарихи үҙәге булған Әрәмә ауылында ғәйнәләр йыйындарын үткәрҙе, шәжәрә байрамын ойоштороҙо.



# ИМАН ТАРАТЫУСЫ БЕЛЕМ УСАҒЫ

***Бөгөнгө көндә, Аллаға шөкөр, әбей-бабайҙар ғына түгел, йәштәр, балалар ҙа дингә ылыға. Махсус дини белем алырға теләүселәр ҙә күп. Улар өсөн республикабыҙҙа Рәсәй Ислам университеты, урта махсус укыу йорттары – мәҙрәсәләр эшләй. Шуларҙың береһе – Өфөләге Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсә.***

Был мәҙрәсә 1997 йылда Башкортостан мосолмандарының Диниә назараты ҡарары менән асыла. Уға билдәле башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының береһе, XX быуат башында мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ойошмаһын етәкләгән, етем балалар өсөн приют ойошторған, мәғрифәтселек менән шөғөлләнгән Мәрйәм Солтанованың исеме бирелә. Мәҙрәсәнең төп бурысы – Башкортостандың мосолман элитаһын, дини кадрҙар әҙерләү.

– Мәҙрәсәлә белем биреү көндөҙгө һәм ситтән тороп укыу бүлектәрендә алып барыла. Көндөҙгө бүлеккә ун беренсе синыфты тамамлаған йәш егеттәрҙе ҡабул итәбеҙ, ситтән тороп укыусылар араһында иһә оло йәштәгеләр ҙә бар.

Уҡырға ҡабул итеү әңгәмәләшеү нигеҙендә башкарыла. Иң мөһиме – кешенең дин тоторға ниәте, теләге булырға тейеш. Холоҡ-фиғеленә иғтибар итәбеҙ, йәшәү рәүештәре хаҡында һорашабыҙ. Бында укый башлағас, шәкерттәрҙең тәртиптәре ыңғай якка үҙгәрә, сөнки әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләренә ҙур иғтибар бирелә. Беҙҙә республика район-ҡалаларынан ғына түгел, күрше өлкәләрҙән, Үзбәкстан, Себер яктарынан килеп укыусылар ҙа бар.

Мәҙрәсәне тамамлаусылар имам һәм мөьәзин булып эшләй ала. Көндөҙгө бүлектә, йәки ситтән тороп та укырға ваҡыттары булмағандар өсөн киске курстар ойошторғанбыҙ, теләге булғандар аҙнаһына бер нисә тапкыр үткән махсус дәрестәргә йөрөй, – ти мәҙрәсәнең директоры Илдар хәҙрәт Малахов.

Бында Әл-Әзһәр (Мысыр), Әр-Рияд (Сәғүд Ғәрәбстаны) университеттарын, МДУ-ны тамамлаған хәҙрәттәр һәм укытыусылар, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге башҡорт дәүләт педагогия университеты укытыусылары белем бирә.

Шәкерттәр Ислам нигеҙҙәрен, ғәрәп, фарсы телдәрен, хөснулхат (йәғни матур яҙыу, каллиграфия серҙәре) өйрәнә. Өҫтәмә рәүештә информатика һәм программалаштырыу нигеҙҙәре дәрестәре лә алып барыла. Мәҙрәсәлә заманса йыһазландырылған компьютер класы, китапхана эшләй, укыу аудиториялары якты һәм уңайлы.

Йыл һайын укыуҙа айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән бер нисә шәкерткә Әл-Әзһәр университетында белем алыуға йүнәлтмә бирелә. Шулай уҡ БДПУ-ла “Юриспруденция. Ислам тарихы һәм мәҙәниәтен тәрәнәйтеп өйрәнеү” бүлегендә лә укыуҙарын дауам итә алалар.



Мәҙрәсәлә укыу ваҡыты – дүрт йыл. Уҡыуҙар, ғәҙәттәгесә, 1 сентябрҙә башлана.

Мәҙрәсәнең көндөҙгө бүлегендә әле 20 шәкерт белем ала. Улар ятаҡ, аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителә. Ашарға үҙҙәре бешерәләр. Ятаҡ бүлмәләрен, укыу аудиторияларын да шәкерттәр тәртиптә тота, кәрәк булһа, ремонт, төҙөләш эштәрен дә башкаралар. Хеҙмәткә, тәртипкә күнегәләр, укыған, йәшәгән ергә, йыһаздарға ҡарата һаҡ мөнәсәбәттә булырға, бер-берендә ҡайғыртырға ла өйрәнәләр.

Айнур Исхаков мәҙрәсәлә икенсе йыл укый. Егет Архангель районының Уҫаҡлы ауылынан.

– Бында укырға килергә әсәйем кәңәш бирҙе. Ул да дин менән нык ҡыҙыкһына. Уҡыуы бик ауыр түгел. Мәҙрәсәне тамамлағас, берәй юғары укыу йортона инеп, донъяуи белем алырға ла уйым бар. Тиҫтерҙәрем дә эсеп-тартып, тәртипһеҙләнеп йөрөмәһендәр, Ислам дине ҡанундары буйынса, дөрөҫ йәшәргә ынтылһындар ине, – ти Айнур.

Ҡыйғы районы егете Фәрит Харисов иһә дүртенсе йыл укый. Ул ситтән тороп Рәсәй Ислам университетында ла белем ала икән:

– Мәҙрәсәне, университетты тамамлағас, Мысырға (Египет) укырға барырға хыялланам. Башка кешеләрҙе дини яктан тәрбиәләр өсөн үҙең бик белемле булырға тейешһең бит, – ти.

Мәҙрәсәлә укып йөрөгән шәкерттәр тәртипле булыуҙары, белемгә ынтылыштары менән һоҡландырҙы. Дуҫтар, ә һеҙҙең арала дин менән ҡыҙыҡһыныусылар бармы? Әгәр ҙә һеҙ алама ғәҙәттәрҙән алыҫ тороп, паклыҡ, сафлыҡ динен өйрәнеп йәшәргә теләйһегеҙ икән, һеҙҙе Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсәлә көтәләр. Бында тап һеҙҙең кеүектәр белем ала.

**Айгөл ҒӘБИҘУЛЛИНА.**

# МАРАТ КӘРИМОВ



**1964-68 йылдарҙа беҙҙең “Аманат” (ул ваҡытта “Пионер”) журналының баш мөхәррире булып эшләгән, Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Нәби улы Кәримов 1930 йылдың 9 ғинуарында Ейәнсура районының Нәби ауылында тыуа. Уны башҡорт сатира жанрының оҫтаһы тиергә мөмкин, сөнки ул уҡыусы ихтирамын үтә ҡатмарлы жанр булған сатирик шиғырҙар, юморескалар, шаян хикәйәләр менән яуланы.**

## Гармун

Сабир ағай гармун алды
Үҙенең улдарына.
Гармун үҙе уйнап тора
Алғанда ҡулдарына.
Быуындай ҡиммәтле бүләккә
Бик шатланды Ғәли ҙә,
Бик шатланды Вәли ҙә.

Малайҙарҙың икеһе лә
Үҙһүҙлерәк булғанға,
Ике арала бәхәс китте:
Кемгә башта уйнарға?
– Тәүҙә мин! – ти Ғәли ҙә,
– Тәүҙә мин! – ти Вәли ҙә.

Икеһе лә ике яҡтан
Бар көскә тартҡылауға
Гармун күреге сыҙаманы,
Шарт итте урталайға.
Хәҙер инде был гармунда
Уйнай алмай Ғәли ҙә,
Уйнай алмай Вәли ҙә.

## Аҡланыу

Дәрес бара. Уҡытыусы
Ҡарай өйгә биргән эште,
Насарына “ике” ҡуя,
Һәйбәтенә ҡуя “биш”те.

Сәләхкә ул асыуланды:
– Оялмайһың аҙ ғына, – ти,–
Өйгә эште атайыңдан
Эшләткәнһең тағы ла, – ти.

Сәләх “ике” ҡуйҙыртмаҫҡа
Әй ялына, әй инәлә:
– Нишләйем һуң?
Әсәйемдең
Ваҡыты юҡ һис кенә лә.

## Мыш-мыш Туйыш

– Тәнәфестә лаң-лоң,
лаң-лоң,
Ә дәрестә быш-быш,
быш-быш.
Туҡтарһыңмы бер саҡ,
Туйыш?
Әйтте Туйыш:
– Һүҙегеҙ буш.
Минең яҡшы яҡтарым бар –
Өндәшмәгән саҡтарым бар.

Өндәшмәгән сағы ҡасан?
Һеҙгә уның серен асам.
Уҡытыусы һорағанда
Һыу ҡапҡандай тора Туйыш.
Танау ғына:
Мыш-мыш... мыш-мыш...

## Бөгәрләнгән бармаҡтар

Бөтә класс инша яҙа,
Бөтә класс егәрләнгән.
Әйүп кенә тик ултыра –
Бармаҡтары бөгәрләнгән.

Уҡытыусы апайға ул:
– Алдамайым, ысын, – тине, -
Әллә нимә булды инде,
Һис асылмай усым, – тине. –
Ручканы ла тотоп булмай,
Ярамай бер эшкә, – тине, -
Юғиһә мин был иншаны
Яҙыр инем “биш”кә, – тине.

Шуҡ малайҙар был
һүҙҙәрҙән
Пырх-пырх итеп көлөштөләр,
Ҡыҙҙар иһә уны йәлләп:
– Ай, меҫкенең! – тиештеләр.

Уҡытыусы әйтте:
– Элек
Ҡулың нисек ине, Әйүп?
– Бына былай! – тине Әйүп
Һәм күрһәтте усын йәйеп.

## Шатлыҡ

Шатлығынан йүгерә-атлап
Өйгә ҡайтып керҙе Рәйес:
– Әсәй! Әсәй! Ишетәһеңме?
Бик шәп үтте бөгөн дәрес!

– Гел зарланғас, әйтеүеңә
Ышанмай ҙа торам әле.
– Шәп булмаймы! Уҡытыусы
Минән бер ҙә һораманы!





# Ҡыуыштау мәмерйәһе

Ҡыуыштау мәмерйәһе (Ҡояштау тигән аңлатмаһы ла бар) Эҫем йылғаһы буйында, Иглин районының Кузнецовка ауылы янында урынлашҡан. Ул Башҡортостандағы гипс мәмерйәләренең иң ҙурҙарының береһе һанала. Оҙонлоғо биш йөҙ метрҙан ашыу, эсендә шишмә аға. Шишмә тыштан башланып, мәмерйә эсенә табан аға һәм төпкә китеп юғала.

Төрлө бейеклектәге залдарының береһендә бүрәнәләрҙән яһалған кеше төйәге табылған. Ҡасандыр, совет власынан ҡасып, бында кешеләр йәшәгән тигән хәтирәләр урындағы халыҡта әле лә һаҡлана. Мәмерйәнең бер-береһенән 500 метр самаһы йыраҡлыҡта ике ауыҙы бар. Төп ауыҙы аҡ төҫтәге гипс ҡаяһында урынлашҡан (шуға исеме ҡояш менән дә бәйләнә).

Барып етеүе әллә ни ҡыйын булмағанға күрә, Ҡыуыштау мәмерйәһендә туристар күп була. Ул тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан ителгән.


















„АМАНАТ" журналы
йондоҙлоғо
2010


Иҙел НУРҒӘЛИН












Швецияның был маркаһы донъяға киң таралған билдәле автомобиль Saab 9-5 Sedan төрҙәренән күпкә ҡалыша. Әммә уның үҙенә генә хас үҙенсәлектәре һәм тышҡы ҡиәфәте бар. Дөйөм алғанда, ул техник яҡтан башҡа тиңдәштәренән әллә ни айырылмай. Ә был моделде хатта “вәкиллекле” класҡа ла индерергә мөмкиндер – оҙонлоғо 5 метр.

Техник йыһазландырыу йәһәтенән был машина бик күп ымһындырғыс яңылыҡтары менән ғәжәпләндермәксе: мәҫәлән, ҡайһы бер прибор күрһәткестәрен дисплей урынына алдағы тәҙрә йөҙөнә сығарыу, артта ултырыусы пассажирҙарҙың алғы ултырғыс артында урынлашҡан дисплейҙа кино ҡарай алыуы, кабинала өс төрлө режимда йылылыҡты көйләү мөмкинлеге һ. б. Ҡыҫҡаһы, барыһы ла уңайлылыҡ өсөн эшләнгән. Тышҡы дизайнында күп нәмә самолетты хәтерләтә.

## «Аманат» коллекцияһы




СУ-47 “Бөркөт” ҡушаматы алған был истребителдең төп үҙенсәлеге – ҡанаттарының алға табан ауыш булыуы. Билдәле булыуынса, истребителдәрҙең төп сифаты – тиҙлек һәм йылғырлыҡ.

СУ-47 һауала үҙен бөркөттәрсә түгел, ыласындарса тота: 34 тонналыҡ машина 18 саҡырым бейеклеккә менеп, секундына 600 метр тиҙлектә хәрәкәт итә ала, 3300 саҡырым алыҫлыҡҡа оса. Ул 30 миллиметрлы пушка, йыраҡ һәм яҡын арауыҡтағы ракеталар менән ҡоралланған.






# “АМАНАТ”ТЫ ӘЛЕ ЛӘ КӨТӨП АЛАМ...”

*Мәғрур тауҙар, сал ҡаялар ҡосағында алкынып-тулҡынып аҡҡан Ағиҙел буйында тәпәй баҫып, Бөрйәндең саф һауаларын һулап, сылтыр шишмәләрен һыулап үҫкән йәш йырсы Иҙел Нурғәлинды белмәүселәр һирәктер. “Гәлсәр һандуғас” фестивале аша тамашасылар күңелен яулап өлгөргән егет бөгөнгә көндә илһамланып ижад итә, баш ҡалабыҙ сәхнәләрендә барған төрлө концерттарҙа сығыш яһай.*

**– Сәләм, Иҙел! Һин бәләкәйҙән сәнғәткә ғашиҡһыңмы? Әллә был һөнәргә төшкәс кенә уяндымы?**

– Әлбиттә, бала саҡтан! Музыкаль ғаиләлә тыуып үҫеүем быға ҙур йоғонто яһағандыр: атайым Зиннәт Морат улы бейергә, йырларға ратһа, әсәйем Ғилмихан Сәйетғәле ҡыҙының тауышына хайран ҡалырлыҡ! Илнур ағайым да йырлай, гитарала уйнай, Гүзәл һеңлем көнсығыш бейеүҙәре менән ҡыҙыҡһына.

**– Мәктәптә уҡығанда ниндәй фәндәрҙе көтөп ала торғайның?**

– Музыка, физкультура, биология, хеҙмәт дәрестәре айырыуса оҡшай ине.

**– Сәнғәт юлынан китмәһәң, ниндәй һөнәр һайлаған булыр инең?**

– Тормошомдо сәнғәтһеҙ күҙ алдына ла килтермәйем. Ә шулай ҙа, уны ғүмерлек юлдашым итеп алмаһам, моғайын да физкультура уҡытыусыһы булыр инем.

**– Үҙең йырларға ратһаң да, төп йүнәлешең баян бит әле. Киләсәктә Иҙел Нурғәлин йыр-моң иленә юл ярырмы, әллә баянсы булып китерме?**

– Вокал һәм баян – минең ҡайырылмаҫ ҡуш ҡанатым. Береһе – хобби, икенсеһе һөнәрем булараҡ күңелемә яҡын. Ижад кешеһе, минеңсә, универсаль булырға тейеш.

**– Күп йырҙарҙы үҙең яҙаһың, илһам минуттары йыш киләме?**

– Күп осраҡта кистәрен, яңғыҙлыҡта, һиллектә тыуа йырҙар. Ҡулыма баян алып, моң донъяһына сумам.

**– Замана артисы ниндәй булырға тейеш?**

– Музыка өлкәһендә грамоталы, үҙ-үҙенә талапсан һәм тырыш.

**– Үҙ өҫтөңдә эшләү өсөн көнөнә күпме ваҡыт бүләһең?**

– Академиялағы дәрестәр, уҡытыусым Миңләхмәт Ғәйнетдинов биргән һабаҡтарҙан тыш, үҙ аллы дүрт сәғәт тирәһе баянда шөғөлләнәм. Унан репертуар һайлау, аранжировкалар эшләү, йыр яҙҙырыу...

**– Ниндәй ҡыҙҙар оҡшай?**

– Насар ғәҙәттәрҙән ары торған **(үҙем кеүек)**, яғымлы сибәркәйҙәргә иҫем китә.

**– Ғаилә ҡорорға йыйынмайһыңмы?**

– Юҡ, иртәрәктер, тим. Был планда 25 йәштәр тирәһенә ҡаралған.

**– Ниндәй маҡсаттар менән янып йәшәйһең?**

– Академияны уңышлы тамамлау һәм сәнғәт күгендә үҙ урынымды табыу.

**– “Аманат” журналын уҡыйһыңмы?**

– Бала саҡта ратҡан журналымды яҙҙырһындар өсөн атай-әсәйемдең маҙаһына тейеп бөтә торғайным. “Мәңгелек сер”, “Хат яҙышайыҡ әле” рубрикаларын, мауыҡтырғыс сканвордтарҙы күрмәйенсә түҙеп буламы һуң? “Аманат” йондоҙлоғо”нда күңелгә ятҡан артистар тураһында уҡып, уларҙан өлгө алыуҙар, постерҙарын стенаға йәбештереп, кумирың кеүек булырға ынтылыуҙар...

Әйткәндәй, “Аманат” минең өсөн – әле лә көтөп алынған ҡунаҡ.

**– Йәш дуҫтарыңа нимә теләрһең?**

– Белемле кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмай, шуға күрә төп көстәрен уҡыуға биреп, һәр яҡлап үҙҙәрен камиллаштырырға ынтылһындар ине!

**Миләүшә ҠАСИМОВА әңгәмәләште.**
**Өфө ҡалаһы.**

---

**Белешмә:**

**Тыуған көнө** – 1988 йылдың 23 сентябре;

**Тыуған яғы** – Бөрйән районының Ағиҙел ҡасабаһы;

**Һөнәре** – музыкант;

**Уҡыған ере** – Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының башҡорт музыкаһы факультетының II курсы.

**Репертуары:**

Үҙе ижад иткән – “Рәхмәт”, “Дуҫтар”, “Ағиҙелдең буйҙарында”, “Атайыма”, “Йондоҙом”, “Роза, ләлә, миләүшә” (Р. Ғәбәсова һүҙҙәре), “Тыуған тупһама” (М. Хисамова һүҙҙәре), “Аҡландарға кил”, “Иман бирһен Хоҙай” (А. Басирова һүҙҙәре), шулай уҡ З. Ҡотлогилдина һүҙҙәренә С. Низаметдинов яҙған “Күҙҙәремә ҡара” (Г. Бикбулатова менән дуэт), “Күңелемдең иләҫ-миләҫ сағы” (З. Фәйзуллина һүҙҙәре һәм көйө),“Һылыуҡай” (М. Ғиләжев һүҙҙәре, А. Хөсәйенов көйө) йырҙары.





# БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ АКАДЕМИЯ ДРАМА ТЕАТРЫНА – 90 ЙЫЛ

***Илебеҙ граждандар һуғышы эсендә ҡайнаған, шул болғансыҡ эсендә яңы Башҡорт Республикаһы яралған 1919 йылда бөйөк шәхес Вәлиулла Мортазин-Иманский нигеҙ һалған Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры шул ваҡыттан бирле Рәсәйҙең иң алдынғы театрҙарының береһенә әйләнде.***



1922 йылда, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килгәс, театр Стәрлетамаҡтан Өфөгә күсә. 1924 йылда төп труппа янында күсмә театр төркөмө барлыҡҡа килә. Ул халыҡ араһында мәҙәни-ағартыу эше менән шөғөлләнә. 1927 һәм 1930 йылдарҙа театр Мәскәүгә гастролдәргә бара, ә 1935 йылда ул академия театры исеме ала. 1954 йылда республика етәкселеге ярҙамы менән Мәскәүҙең А. Луначарский исемендәге театр институтында (ГИТИС) башҡорт студияһы асыла.

Бөгөн академтеатр – күп яҡлы спектаклдәр ҡуйған, йыл һайын төрлө халыҡ-ара фестивалдәрҙә уңышлы сығыш яһаған, Башҡортостан райондары һәм Рәсәй ҡалаларында әүҙем гастролдәрҙә йөрөгән ҙур коллектив. Унда абруй-лы өлкән һәм урта быуын актерҙары менән иңгә-иң тереп, уларҙан өйрәнеп, Мәскәүҙең М. Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһының башҡорт сту-дияһында уҡып ҡайтҡан, Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлаған талантлы йәш актерҙар ҙа эшләй.



## Иғтибар: кем алыҡ?

*Академтеатрҙың директоры Рәйес Абдрахман улы Исмәғилев “Аманат” журналы уҡыусыларына ошондай тәҡдим менән сығыш яһай: журналдың тышлығының дүртенсе битендә баҫылған ҙур фотоһүрәттәге театр коллективы ағзалары араһынан кем дә кем иң күп артисты таный ала, шуға театрға ике кешелек билет бүләк ителәсәк (еңеүсе балаға һәм уны Өфөгә оҙатып килеүсегә).*

*Һеҙҙең бурыс, хөрмәтле уҡыусылар – фотонан мөмкин тиклем күберәк артистарҙы танып (барыһын да таныу мөмкин түгелдер, моғайын), фотолағы урынын билдәләп (мәҫәлән, өсөнсө рәт, һулдан икенсе), тиҙерәк беҙгә яҙып ебәреү.*

*Килгән яуаптар араһынан иң күп артисты дөрөҫ таныған тәүге етәүҙе еңеүсе буласаҡ.. Зинһар, яуаптарға үҙегеҙ менән нисек бәйләнешкә инергә булыуын асыҡ яҙығыҙ.*

*Шулай итеп, кем алыҡ?*











# Йәйен һоро, ҡышын аҡ






## ҠУЯН ТҮГЕЛ, ТҮГЕЛ ҠУРҠАҠ

Был образдың беҙ шеш ҡолаҡ ҡуянды сағылдырыуына күнеккәнбеҙ. Асылда иһә беҙҙең яҡтарҙа йәйге тунын ҡышҡылыҡҡа алыштырыусы кейектәр етерлек: йәтсә, хатта тейен дә. Шуларҙың береһе – аҫ (горностай).

Ул ер шарының төньяҡ ярымшарында һәр ерҙә таралған. Беҙҙең яҡтарҙа ла бик күп. Йыш ҡына уны үҙенең ҡәрҙәше, кеше янында уҡ йәшәгән йәтсә (ласка) менән бутайҙар, сөнки ҡиәфәттәре, ысынлап та, бик оҡшаш. Тик аҫ йәтсәнән ҙурыраҡ, уның ҡойроғо оҙонораҡ һәм йомшағыраҡ, ҡойроҡ осо һәр ваҡыт ҡара була.





Һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған бик күп кейектәр кеүек, аҫ та бәләкәй генә, нәҙек, оҙон кәүҙәле, әммә бик хәтәр йыртҡыс. Ул үҙенән күпкә ҙурыраҡ алйырҙан өңөнә лә үтеп инеп, уға ҡыйыу ташлана, елкәһенән тешләп алып үлтерә. Аҫ шулай уҡ бик яҡшы йөҙә, ағас башында ла, ҡар аҫтында ла йөрөй. Ҡуяндар, әлгәнйәк, һуйыр, сел, ағуна кеүек хайуан-ҡоштар аҫ өсөн – төп ҡорбан. Аслыҡ йылдарында ул әләккән нәмәне, хатта бөжәктәрҙе, тәлмәрйен-кеҫәрткеләрҙе лә ашай, балыҡсылай ҙа ала. Үҙенә хәүеф янаған ваҡытта уның хатта кешегә лә ташланыуы мөмкин. Ләкин төлкө, һыуһар, кеш, бурһыҡ, йыртҡыс ҡоштар, хатта эт һәм йорт бесәйе өсөн ул үҙе еңел табышҡа әйләнеүе ихтимал.



Аҫ күпселектә һыу буйҙарында, яҡында һыу булған йырындар буйлап йәшәй. Яланға ла сыҡмай, ҡуйы урман эсенә лә инмәй. Йәшәр урын һайлағанда төп маҡсат – ризыҡ булырлыҡ сысҡандарҙың күплеге. Шул сәбәпле уның кеше төйәге тирәһенә лә эйәләүе ихтимал, был саҡта ауылдарҙа тауыҡтарға көн бөтә.



Аҫ яңғыҙ һунарсы, ғаилә ҡормай, ата һәм инәләре айырым көн күрә. Һунарға төндә һәм эңер ваҡытында сыға. Инә аҫ ояһын балаларын тәбиғәләү өсөн генә яһай, уның өсөн урынды бик һайлап тормай. Өңө бесән өйөмө аҫтында ла, таш араһында ла, иҫке ҡоролмалар аҫтында ла, башҡа ваҡ йәнлектәрҙең өңөндә лә булыуы мөмкин. Ул үҙе өң ҡаҙып мәшәҡәтләнмәй, әҙер урын тапҡас, шунда ҡоро үләндән һәм ҡорбандарының йөндәренән уңайлы оя яһай һәм шунда апрель айында 4-9 бала таба. Балалары сысҡандыҡы һымаҡ яланғас, һуҡыр һәм тешһеҙ тыуа, әммә улар бик йылдам үҫеп китәләр һәм 2-3 айҙа өлкәндәрҙе ҡыуып етә.



Аҫ ете йылға тиклем йәшәргә һәләтле. Әммә тәбиғәттә улар бер-ике йылдан артыҡ йәшәмәй, сысҡандарҙың күплегенә ҡарап, уларҙың һаны ла үҙгәреп тора. Шулай уҡ аҫҡа ҡиммәтле тиреһе өсөн һунар ҙа итәләр. Тәбиғәттә ул сысҡандарҙы юҡ итеп тороусы төп көс һанала. Ҡасандыр, ныҡ үрсеп киткән ҡуяндарҙы кәметеү өсөн уны Яңы Зеландияға ла алып барғандар, әммә ул үҙе лә унда ныҡ үрсеп китеп, файҙалы ҡоштарҙың дошманына әүерелгән.

# Өçтәл сервировкалау

*Кем генә өйөнә ҡунаҡ килгәнен яратмай икән? Был йәһәттән беҙҙең халыҡ бигерәк ҡунаҡсыл, саҡырылып килгәнен дә, йомошҡа ингәнен дә еренә еткереп, матур итеп һыйлап сығарырға тырыша. Байрамдарҙы ла ҡунаҡтар саҡырып үткәрергә яратабыҙ. Үҙеңдең уңған хужабикә, оҫта ашнаҡсы икәнеңде күрһәтеү өсөн бик шәп мәл инде ул байрам табындары.*

*Әсәй-өләсәйҙәргә ярҙам итеп йөрөп, күп ҡыҙҙар йәштән үк бешереүгә өйрәнә. Төрлө-төрлө тәмле ризыҡтар әҙерләй белеү – буласаҡ хужабикә өсөн бик кәрәкле, файҙалы сифат.*

*Тырышып бешергән тәмлекәстәрҙе матур, дөрөҫ итеп өҫтәлгә ҡуя белергә лә кәрәк бит әле. Шуны күҙ уңында тотоп, "Оҫтахана"ның бөгөнгө сығарылышында заманса өҫтәл сервировкалау серҙәре менән бүлешмәксебеҙ.*

Табындың ниндәй байрам хөрмәтенә үткәрелеүенә ҡарап, сервировка төрлөсә була ала. Мәҫәлән, 8 март байрамына арнап әҙерләнгән өҫтәлде сәскәләр менән биҙәргә була, яңы йыл өҫтәлен иһә шыршы ботаҡтары, гирлянда, шәмдәр менән матурларға мөмкин. Сервировка әйберҙәренең менюға тап килеүе, төҫтәре, формалары буйынса һайлап алыныуҙары мөһим.

Иң тәүҙә өҫтәлгә ашъяулыҡ йәйелә. Ул таҙа, яҡшы итеп үтекләнгән, йәки крахмалланған булырға тейеш. Ҡағиҙә буйынса, ашъяулыҡтың ситтәре өҫтәлдең бөтә яҡтарынан да 25 – 30 сантиметрға төшөп тора. Ҡунаҡтар һанына ҡарап, өҫтәлгә ҙур, һай тәрилкәләр ҡуйыла. Уларҙың өсөнә – ҡабымлыҡтар өсөн тәрилкәләр. Матурлап бөкләнгән салфеткалар тәрилкәләр өҫтөнә, йәки эргәһенә һалына.

Ҡалаҡ, сәнске, бысаҡтарҙың һаны менюла нисә төрлө блюдо булыуынан тора. Ҡабымлыҡтар өсөн прибор бысаҡ менән сәнскенән, балыҡ аштары өсөн булғаны ҡалаҡты хәтерләткән тупаҡ бысаҡтан һәм ҡыҫҡа сәнскенән, ҡайнар аштар өсөн тәғәйенләнгәне бысаҡ, сәнске, ҡалаҡтан ғибәрәт. Десерттар өсөн махсус бәләкәй ҡалаҡ, өс йәпле сәнске, нәҙек бысаҡ ҡулланыла. Емеш-еләк ашау өсөн ике йәпле сәнске һәм бәләкәй бысаҡ ҡуйыла. Бысаҡтар үткер яҡтары менән тәрилкәгә ҡаратып һалына, ә сәнске, ҡалаҡтарҙың ҡабарынҡы яҡтары аҫта булырға тейеш.

Сәнске-бысаҡтарҙы ҡулланғанда иң тәүҙә ситтә ятҡан приборҙарҙан башлайҙар һәм тәрилкә эргәһендәгеләре менән тамамлап ҡуялар.

Ашауҙан туҡталып торғанда приборҙарҙы тәрилкәгә арҡырыбуйға һалалар: бысаҡтың үткер яғы һулға ҡаратыла, сәнскенең ҡабарынҡы яғы – өҫкә. Уларҙың һаптары сәғәт телдәрен хәтерләтеп ятырға: бысаҡ һабы "етелә", сәнскенеке "биштә" булырға тейеш. Ашап бөткәс, приборҙар бер-береһенә параллель рәүештә тәрилкәгә һалына, һаптары сәғәт "бише" күрһәтеп ята.

Бокалдар тәрилкә эргәһенә, өҫтәлдең уртаһына яҡыныраҡ ҡуйыла.

Икмәк телемдәре һалынған тәрилкәләр өҫтәлдең буйынан-буйына урынлаштырыла. Һәр кемрең алдына махсус тәрилкәгә ҡуйыла.

Төрлө ҡабымлыҡтар һалынған тәрилкәләр, бөтәһенең дә буйы етерлек итеп, өҫтәл буйлап теҙеп сығыла. Балыҡтан әҙерләнгән ҡабымлыҡтар – оҙонса нәҙек һауыттарҙа (селедочница), ит киҫәктәре, тертелдәктәр – овал формаһындағы һауыттарҙа, ит, йәшелсәнән әҙерләнгән ҡабымлыҡтар – йомро һауыттарҙа, салаттар махсус тәпәш вазаларҙа бирелә. Дөйөм тәрилкәләрҙән ашамлыҡтар алыр өсөн ҙур ҡалаҡтар, сәнскеләр, ҡыҫҡыстар файҙаланыла.

Беренсе, икенсе блюдолар, десерт өсөн айырым тәрилкәләрҙе табын барышында алып киләләр. Кәршәктә бешкән блюдалар шул килеш, һай тәрилкәгә ултыртып бирелә.

Сәй, ҡәһүәне өҫтәл артында яһайҙар. Һөт һауыты, шәкәр, варенье, лимон һалынған вазалар, бәлеш, торт, пирожныйҙар өҫтәлдең уртаһына ҡуйыла.

Ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе иҫегеҙҙә тотоп әҙерләһәгеҙ, табынығыҙ үҙегеҙгә лә, ҡунаҡтарығыҙға ла оҡшар, дуҫтар.




***СЕРВИРОВКА ТӨРҘӘРЕ:***

***1. Май өсөн бысаҡ. 2. Икмәк һала торған тәрилкә. 3. Аш ҡалағы. 4. Балыҡ аштары өсөн сәнске. 5. Балыҡ аштары өсөн бысаҡ. 6. Төп блюдо өсөн сәнске. 7. Төп блюдо өсөн бысаҡ. 8. Ҙур тәрилкә. 9. Ҡабымлыҡтар өсөн тәрилкә. 10. Десерт ҡалағы. 11. Десерт сәнскеһе. 12. Эсемлектәр өсөн бокал. 13. Шампан шарабы өсөн фужер. 14. Ҡыҙыл шарап өсөн бокал. 15. Аҡ шарап өсөн бокал.***

**А. ҒӘБИҘУЛЛИНА.**

15 йәш. Саян. Буш ваҡытта бәйләргә, сигергә, бешеренергә, китап уҡырға яратам. Шулай уҡ спорт менән шөғөлләнәм. Бигерәк тә баскетбол, волейбол оҡшай. Йәштәштәремдән хат көтәм.
Ишморатова Таңсулпан.
453580, Бөрйән районы,
Яңы Усман ауылы,
Муса Мортазин урамы, 8.

***

14 йәш. Бергә бейеүҙә ҡатнашабыҙ, компьютерҙа уйнайбыҙ, музыка тыңлайбыҙ.
Шакирова Регина.
452265, Илеш районы,
Тыпый ауылы, Мәктәп урамы, 42.
Ғәзизова Ильвена.
452265, Илеш районы,
Тыпый ауылы,
Мәктәп урамы, 50.
Тел.: Регина: 89656578501.
Ильвена: 89373621389.

***

1992 йылдың 3 ноябрендә тыуғанмын. Ҡул эштәре менән мауығам. Бешеренергә, музыка тыңларға яратам. Хат яҙығыҙ, бөтәгеҙгә лә яуап бирәм.
Шәйхуллина Айһылыу.
452645, Шаран районы,
Үрге Ташлы ауылы,
Социалистик урам, 28.

***

15 йәш, Саян. “Ынйы” бейеү түңәрәгендә шөғөлләнәм һәм “Салауат Юлаев” хоккей командаһы көйәрмәнемен. Буш ваҡытта төрлө китаптар, журналдар уҡырға яратам, бигерәк тә “Аманат” журналын. Шөғөлдәрем һәм үҙем тураһында тулыраҡ хатҡа яҙырмын.
Маннанова Лилиә.
452314, Дүртөйлө районы,
Семилетка ауылы,
Төньяҡ урамы, 3/3.
ICQ: 372008153.

***

13 йәш. 12 – 14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
Мусина Һылыу.
452729, Бүздәк районы,
Шығайкүлбаш ауылы,
Үҙәк урамы, 43.
Тел.: 89875914258.

11 йәш. Балыҡ. Баянда уйнарға өйрәнәм. Тиҫтерҙәремдән хат көтәм.
Фәтҡуллина Нәркәс.
453526, Белорет районы,
Йомаҡай ауылы,
Клуб урамы, 2.




17 йәш. Игеҙәктәр. Музыка тыңларға, һүрәт төшөрөргә әүәҫмен. Йәштәштәремдән хаттар көтөп ҡалам.
Солтанов Илнур.
453050, Ғафури районы,
Красноусол ҡасабаһы,
Свердлов урамы, 18.

***

Фирүзә – 11, Илүзә 12 йәштә. Буш ваҡытта телевизор, DVD ҡарайбыҙ, спорт менән шөғөлләнәбеҙ, “Салауат Юлаев” командаһы өсөн “көйәбеҙ”. 10 – 13 ҡыҙҙар һәм малайҙар хат яҙһа ине.
Ибраһимова Фирүзә.
453871, Мәләүез районы,
Һыртлан ауылы,
Үҙәк урам, 12.

***

14 йәш. Кәзәмөгөҙ. Радик Юльяҡшин, Рәил Өмөтбаев, МС Баш, Мс Инсан башҡарыуындағы йырҙарҙы яратып тыңлайым. 13 – 16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йә смс, шылтыратыу көтөп ҡалам.
Соболева Елена.
453722, Учалы районы,
Рысай ауылы,
Тау урамы, 31.
Тел.: 89656527066.

***

15 йәш. Саян. Кумирҙарым: “Inna”, МС Фил, Мс Баш. Волейбол, футбол, өҫтәл теннисы уйнарға яратам. 15 – 17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәм.
Кинйәбулатова Гөлзифа.
453625, Әбйәлил районы,
Әбделғәзе ауылы,
27-се Партсъезд урамы, 34.
ICQ: 49918011.

***

14 йәш. Үҡсы. Иң яратҡан шөғөләм – бейеү һәм спорт. 14 – 16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йә смс хәбәрҙәр көтәм.
Хөснөтдинова Элина.
452587, Балаҡатай районы,
Түбәнге Үтәш ауылы,
М. Ханов урамы, 26.
Тел.: 89603887087.

***

13 йәш. Буш ваҡытта музыка тыңлайым. “Фактор – 2”, “50 Cent” һәм “Звери” төркөмдәре оҡшай. 11 – 13 йәшлек ҡыҙҙарҙан хат көтәм.
Дәүләтбаев Ильяс.
453650, Баймаҡ ҡалаһы,
Пимонов урамы, 19.

***

13 йәш. Игеҙәктәр. Яратҡан йырсыларым – Лиана Хәбибуллина, Радик Юльяҡшин, МС Баш. 13 – 15 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки смс хәбәр көтәм.
Сабитова Яҙгөл.
452058, Бишбүләк районы,
Ҡаныҡай ауылы,
Коммунист урамы, 18.

***

16 йәш. Буш ваҡытта музыка тыңлайым, бәйләйем. Рэп һәм поп стилендәге йырҙар оҡшай. 15 – 17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтөп ҡалам.
Алтынбаева Гөлназ.
453611, Әбйәлил районы,
Рәхмәт ауылы.

***

Ай, һылыу!

# Һыуығай һылыуы



**Мин, Айгөл Солтанова, Салауат районының Радио ауылынан булам.** Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының X “Е” синыфында белем алам. Бөтә фәндәрҙән дә яҡшы билдәләргә өлгәшәм. 2008 йылда “Салауат ерендә” гәзитендә ойоштолған “Һылыуҡай” фотоконкурсында икенсе урын яулап, аҡсалата премияға лайыҡ булдым. Киләсәктә юғары белем алып, күңелем теләгән һөнәргә эйә булырға хыялланам.



**Нәркәс Хәсәнова. Белорет районы Йөйәк ауылынан:**

“Иң яратҡан шөғөлөм – бейеү. Айырыуса заманса бейеүҙәрҙе үҙ итәм. Яратҡан дәресем – инглиз теле. Киләсәккә хыялым – модель булыу”.



**Әлмира Хөснөтдинова. Балаҡатай районы, Үтәш ауылынан:**

Бәйләргә, һүрәт төшөрөргә, китап уҡырға әүәҫмен. Йәшәү девизым: тик алға, беренсе булырға ынтылыу”.



**Гөлдәриә Баязитова. Баймаҡ районы, Темәс ауылынан:**

“Бәләкәйҙән йырларға яратам. Математика һәм рус теле дәрестәрен көтөп алам. Киләсәктә йырсы булырға хыялланам”.



**Гөлирә Әҙеһәмова. Йылайыр районы, Һабыр ауылынан:**

“Төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, алдынғы урындар яулайым. Киләсәктә табип булырға хыялланам”.

“Ай, һылыу!” конкурсы 2010 йылда ла дауам итә. Конкурс шарттарын йәнә иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Яҡшы сифатлы, үҙенсәлекле, ҙур форматта эшләнгән фотоһүрәттәрегеҙҙе (бер нисәүҙе мөмкин) редакцияға һалып ебәрегеҙ. Ҡыҫҡаса үҙегеҙ менән таныштырырға ла онотмағыҙ. Иң уңышлы фотоһүрәттәр йыл буйына журнал биттәрендә баҫылып барасаҡ. Ай һайын беҙҙең жюри тарафынан бер еңеүсе, әйтәйек, ғинуар һанында – һыуығай, февралдә – шаҡай һылыуы билдәләнеп, журналда баҫыласаҡ. Йыл буйы дауам иткән конкурстың 12 ай һылыуы араһынан гүзәлдәрҙең гүзәле тип табылған һылыуҙың – йыл һылыуының фотоһүрәте 2011 йылда журнал тышлығында донъя күрәсәк.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, былтыр редакцияға килгән фотолар араһында насар сифатлы, тоноҡ булғандары ла күп осраны. Шуға күрә, дуҫтар, ғафото төшөүгә етди ҡараһағыҙ ине.

Һеҙҙән матур-матур фотоһүрәттәр көтәбеҙ. Шулай уҡ ата-әсәләр, егеттәр ҙә ҡыҙҙарының йә туғандарының фотоларын ебәрә ала (әлбиттә, башта үҙенең ризалығын алып). Мәктәп йәшәнән үткән ҡыҙҙар конкурста ҡатнашыуға дәғүә итә алмай.




«Шәп малай» конкурсының ноябрь айының еңеүселәре тип дөрөҫ яуаптарҙы беренсе булып ебәргән **Әбйәлил районының Хәмит ауылынан Гәүсәриә Баһауетдинова** менән **Бөрйән районының Яңы Усман ауылынан Зилиә Мәжитованы** иғлан итәбеҙ. Афарин!

**Дөрөҫ яуаптар (№12-2009)**

1. Белиз,
2. Канада,
3. Кот-д'Ивуар,
4. Ливия,
5. Маврикий,
6. Марокко,
7. Черногория,
8. Көньяҡ Африка,
9. Тонга,
10. Уганда.

Ә был флагтарҙың ҡайһы илдәрҙеке икәнен, йә, кем беренсе белер һәм хәбәр итеп өлгөрөр – шул еңеүсе!

Һеҙҙән хаттар һәм телефон аша хәбәрҙәр көтәбеҙ!

СМС-хәбәр ебәрер өсөн кеҫә телефонынан 3443 номерын һәм «Малай» префиксын йыйырға кәрәк.



1



2



3



4



5



6



7



8



9



10

Префикс: “Малай”

## *Шылтыратыуҙар көтәм*




Ул беҙҙең мәктәптә туғыҙ йыл уҡыны. Тәүҙә мин уға битараф булдым. Ул миңә бар ни, юҡ ни ине. Ләкин бер йәйге кистән һуң битарафлыҡ юғалды, гел уны күргем килде.

Ул кистә беҙҙә мәжлес ине. Әхирәтем, ай-вайыма ҡарамай, урамға алып сыҡты һәм уларҙың ҡапҡа төбөндә егеттәрҙе көтөп торорға ҡушты. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ул, дуҫын эйәртеп, килеп тә сыҡты. Дуҫы – әхирәтемде, ә ул мине ҡосаҡлап алды ла, тыҡрыҡ буйына алып инеп китте. Мин тәүҙә ысҡынырға маташтым, ләкин өшөүҙән уға һыйынырға мәжбүр булдым.

Икенсе кистә беҙ тағы ла сыҡтыҡ, әммә улар сыҡманы.

Бер аҙнанан һуң уға ғашиҡ булғанымды һиҙҙем. Хис-тойғоларымды смс-хәбәр итеп ебәрҙем. "Онот, мин һинең менән йөрөмәйем бит" – тигән яуап килде. Быны уҡығас, мендәргә ҡапланып иланым һәм бүтән урамға сыҡмаҫҡа тигән ҡарарға килдем.

Ҡыш еткәс, ул миңә шылтыратты. Шунан башлап дуҫтарса ғына әңгәмәләшә башланыҡ.

Бер кистә әхиртем менән урамға сыҡтыҡ. Улар беҙҙе тағы оҙатып ҡуйҙы. Ул мине оҙаҡ ҡуйынынан ысҡындырмай торҙо. Шул минуттарҙа минән дә бәхетлерәк кеше юҡ кеүек тойолдо. Беҙҙең аралар яҡынайған һымаҡ булды...

Икенсе көндө ул мин ҡайтып киткәс кенә сыҡҡан һәм әхирәтемә: "Бер көн оҙатҡанға ымһынып йөрөмәһен!" – тигән. Быны ишетеү миңә бигерәк ауыр булды.

Шулай көндәр, айҙар үтте. Бер ваҡыт ул миңә тағы шылтырата башланы. Урамға саҡыра. Сыҡҡым килһә лә, сыҡмайым. Бер көн оҙатыр ҙа, икенсе көнөнә тағы арттан һөйләр, тип ҡурҡам. Тиҙерәк онотор өсөн "бүтән шылтыратма" тинем. Ысынлап та, шылтыратмай хәҙер, әммә үҙем һаман шылтыратыуҙар көтәм. Хат аша булһа ла эс-серҙәрен асыр, тип өмөтләнәм.

Әсәйемә быны һөйләр инем, ул мине аңламай, әхирәтемә ышанмайым. Мине тик уның дуҫы ғына аңлай, шикелле. Ул беҙҙе нисек тә ҡауыштырыу яғында, ләкин килеп сыҡмай. Бәлки, һеҙҙең арағыҙҙан миңә кәңәш биреүселәр булыр?

**СЕРЛЕ ЙОНДОҘ.**

## *Онот, тиһең...*

**(Нәсер)**

*– Онот уны! Башка бер касан да хәтереңә төшөрмә, йөрәгеңдән төбө-тамыры менән йолкоп ташла!!! Ниңә кәрәк һиңә ундай мөхәббәт? Кем өсөн ғазапланып, ҡайғыға батып йөрөйһөң бит әле... Йәшһең, матурһың. Һиңә башка егеттәр бөткәнме ни? Теләйһеңме, мин һине шәп бер егет менән таныштырам. Шулай, әхирәт, тормош һин теләгәнсә генә бармай. Һин яратмаған кеше һинең өсөн йәнен бүлеп бирергә әҙер тора, ә һин бар булмышың менән өҙөлөп һөйгән кеше, исмаһам, күҙ ҡырыйы менән булһа ла карамай...*

*Йә, ярай, ҡайғырма инде... Онот та ҡуй...*

*Эйе, һин мине үҙеңсә йыуатырға, һағыштарҙан бер аҙға булһа ла арындырырға тырышаһың. Рәхмәт, әхирәткәйем, һин булмаһаң, ошо минутта мин ни эшләр инем дә, эс-серҙәремде кемгә бушатыр инем?*

*Онот, тиһең... Күрәһең, һинең бер ҡасан да бер кемде лә өҙөлөп ятратканың булмағандыр. Йөрәгеңдән төбө-тамыры менән йолкоп ташла, тиһең... Ә минең һуң уға хаҡым бар микән? Һиңә ундай мөхәббәт нимәгә кәрәк, тиһең... Ә кемделер өҙөлөп яратыу үҙе ҙур бәхет түгелме ни? Ғөмүмән, нимә һуң ул мөхәббәт? Шуны миңә аңлатып бирһәң ине...*

*– Нимә ул мөхәббәт, тиһеңме? – һин һөйләп торған ереңдән туктап, һораулы ҡарашыңды төбәйһең. Үҙем дә һиҙмәҫтән, ҡыскырып биргән һорауымдан уңайһыҙланып, күҙ ҡараштарымды һинән йәшерәм. Их, мин иҫәр, ҡапыл уйлап торған уй-хистәремде нисек ҡыскырып әйткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Ә һин көтөп-көтөп тә минән яуап ала алмағас, ҡыскырып көлөп ебәрәһең:*

*– Их, һин, иҫәркәйем! Үҙең мөхәббәттең нимә икәнен дә белмәйһең, ә кемделер яратам, тигән булаһың, уның өсөн күҙ йәштәреңде түгәһең.*

*Ә минең күңелемә кабаттан һин әйткән һүҙҙәр килә. Эстән генә һинең менән бәхәсләшергә, нимәләр аңлатырға тырышам. Эйе, мин бит уны оноторға ла тырышып караным. Уның күҙ караштары менән кабат осрашмаҫка, тауышын ишетмәҫкә, шулай итеп, уны йөрәгемдән мәңгелеккә сығарып ташларға карар иттем...*

*Ләкин... Уның гел йылмайып торған күҙ караштарын осратыу менән бөтә карарҙарым селпәрәмә килә. Минең өсөн бары бөтәһенән дә кәҙерлерәк булған уның балкып торған күҙҙәре генә кала.*

*Мин бит уны яратам. Уның менән бер ҡасан да бергә кала алмаясағымды белһәм дә, бөтә күңелем менә өҙөлөп яратам.*

*Ә ул... Мине яратамы? Белмәйем... Белергә лә теләмәйем. Иң мөһиме, минең йөрәгемдә саф мөхәббәт бөрөләнгән. Ул миңә йәшәү көсөн бирә.*

*Ә һин онот, тиһең...*

**Сөмбөл БАРЛЫБАЕВА.**
**Баймаҡ районы,**
**Йомаш ауылы.**




# Компьютер сирләйме?

Компьютерығыҙҙың тиҙлеге кәменеме, операция системаһы төрлө-төрлө белдереүҙәр сығарып аптыратамы, үҙенән үҙе һүнеп кире тоҡана, йәки көтмәгәндә зәңгәр экран һеҙгә таныш булмаған тамғалар менән сыбарланамы? Тимәк, компьютер зарарланған – вирус эләккән. Вирус тигәс, тән зымбырлап китә, үҙеңдә грипп эләктергән кеүек хис итәһең. Бындай хәлдәнән ҡотолоп буламы, уға юл ҡуймау ысулдары бармы икән?

Ғөмүмән, нимә ул вирус? Ул да үҙенә күрә бер компьютер програмаммаһы, тик ул үҙенең кусермәһен үҙаллы күбәйтеп таратыу, операция системаһының мөһим файлдарын бөтөнләй юк итеү йәки системаға тейешле урынды биләү һәләте менән билдәле. Әлбиттә, компьютер вирусының кеше сирҙәре кеүек төрлөләре була. Мәҫәлән, файл вирусы, “трояндар”, “селәүсендәр”, спамдар, шымсы-программалар һәм башҡалар.

Бындай сирҙән ҡотолоу юлын белмәһәгеҙ, беренсенән, компьютерҙы әҙмәҙ белгән ағай-апайҙарығыҙҙы ярҙамға саҡырырға кәрәк.

Һуңынан бергәләп вирустарҙан таҙартыусы программаларҙан һеҙгә ярашлыһын һайлап алырға кәрәк. Һеҙ ошо адрестар менән интернет селтәре аша антивирус программалары менән таныша алаһығыҙ:

http://www.kaspersky.ru/ – “Касперский лабораторияһы” компанияһы.

http://www.drweb.com – “Доктор Веб” компанияһы.

http://www.freedrweb.com/cureit/ – “Доктор Веб” компаниһы бушлай сығарған антивирус программаһы.

http://www.esetnod32.ru/ – Словакияла ойошторолған антивирус сайты.

http://personalfirewall.comodo.com/download_firewall.html – АҠШ-та ойошторолған антивирус сайты.

Бәлки машинағыҙҙың тиҙлеге кәмеүе операция системаһы торған урындың күләме кәмеүе менән бәйлелер, ул сағында иң кәмендә 2 гигабайт урын бушатырға кәрәк.

Әгәр ҙә төрлө кәрәкмәгән иғландар, белдереүҙәр яфалай икән, антивирус программаһын ҡуйып, операция системаһын хәүефһеҙ режимда вирустарға тикшереү мотлаҡ.

Йылдар буйы йыйып килгән көй-моң йыйынтығы, мөһим документтарығыҙ бер-ике минут эсендә юк булды икән, тимәк һеҙ етди генә вирус эләктергәнһегеҙ. Был осраҡта, антивирус ярҙам итмәһә, операция системаһын яңынан ҡуйырға тура киләсәк.

Антивирус программаһын ҡуйғас, вирустарҙы эҙләү йыйынтығын яңыртып торорға онотмағыҙ. Программаның үҙен дә даими яңыртыу кәрәк. Интернет– селтәренә инер алдынан мотлаҡ антивирус программаһын эшләтергә һәм фаерволды ҡабыҙырға кәрәк. Иң күп вирустар интернет аша инә. Шулай уҡ ниндәй генә диск булмаһын, флэш-карталар, usb – янсыҡтарҙы компьютерға ҡуйыу менән вирустарға мотлаҡ тикшереү кәрәк.

**Заһит ӘБИЛЕВ.**

# “Ҡыҙыл йондоҙ” ордены

***“Ҡыҙыл йондоҙ” – тәүге СССР ордендарының береһе. Барлыҡҡа килеү ваҡыты буйынса ул Советтар Союзының икенсе хәрби ордены булып тора. “Ҡыҙыл йондоҙ” СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты (Хөкүмәтенең) Президиумы ҡарары менән 1930 йылдың 6 апрелендә булдырыла. Был орден менән, ғәҙәттә:***

– Яуҙа күрһәткән шәхси батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ, ғәскәрҙәрҙең уңышына булышлыҡ итерҙәй итеп һуғыш хәрәкәттәре менән оҫта етәкселек иткән;

– Дошманға ҙур юғалтыуҙар килтерерҙәй уңышлы һуғыш алып барған;

– Ил сиген һаҡлауҙа күрһәткән хеҙмәттәр һ. б. өсөн бүләкләр булғандар.

“Ҡыҙыл йондоҙ” орденының авторҙары рәссам В. К. Куприянов менән скульптор В. В. Голенецкий. Орден көмөштән ҡойола. Ул ҡыҙыл эмаль менән ялатылған биш ҡырлы йондоҙ рәүешендә эшләнгән.

“Ҡыҙыл йондоҙ” орденын тәүҙә түштең һул яғында тағып йөрөү ҡарала, 1943 йылдың июненән уң яҡта тағыу ҡағиҙәһе индерелә.

Тәүге орден менән 1930 йылдың 13 майында Алыҫ Көнсығыш махсус армияһы сардары, 1-се рангалағы командарм В. К. Блюхер бүләкләнә. Ул был орденға 1929 йылда Көнсығыш-Ҡытай тимер юлында ҡытайҙарҙың агрессияһына ҡаршы уңышлы хәрби операция үткәргәне өсөн лайыҡ була. Әйткәндәй, 1918 йылда тәүге, йәғни беренсе һанлы “Ҡыҙыл байраҡ” орденына ла Блюхер лайыҡ булала.

Бөйөк Ватан һуғышына тиклем “Ҡыҙыл йондоҙ” ордены менән 21 меңдән ашыу яугир, шулай уҡ 17 ғәскәри берәмек бүләкләнә.

Айырыуса 1938 йылда Хәсән күле янында япондарға ҡаршы һуғышҡан совет яугирҙары күпләп был орденға лайыҡ була. Ә инде Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында “Ҡыҙыл йондоҙ” 2 миллион 860 мең яугир һәм ғәскәри берәмеккә тапшырыла.

Бөйөк Ватан һуғышында беренселәрҙән булып орден менән бомбардировщиктың радист-атыусыһы кесе сержант Д. А. Беловол бүләкләнә. Заданиенан ҡайтып килешләй беҙҙең самолеттарға немец истребителдәре һөжүм итә. Ҡапыл тоҡанып киткән алышта Беловол дошмандың өс самолетын бәреп төшөрә. Үҙе дүрт тапҡыр яралана.

Һуғыштан һуң ордендың абруйы әҙерәк төшә. Сөнки 1944 йылдан башлап ул оҙайлы хеҙмәт өсөн (15 йыл фиҙәкәр хеҙмәт иткән өсөн) тапшырыла башлай. Был ҡағиҙә 1958 йылда бөтөрөлә. Ошо осорҙан алып “Ҡыҙыл йондоҙ”ҙоң хәрби орден буларак абруйы тағы күтәрелә.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**



# ҠАҒИҘӘЛӘР ҮҘГӘРҘЕ

**Былтыр үткәрелгән БДИ йомғаҡтары буйынса абитуриенттар үҙҙәре һайлай алған барлыҡ вуздарға ла документтарын ебәрә ала ине. Әммә был ҡабул итеү комиссияларында байтаҡ ҡатмарлыҡтар тыуҙырҙы. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ әле: берәй уҡыу алдынғыһы бер юлы Мәскәүҙә лә, алыҫ Көнсығышта ла уҡырға инә! Хәйер, уҡырға ингәндә төп нөхсә урынына документтарҙың күсермәләрен тапшырырға мөмкин булыуы ла шундай уҡ уңайһыҙлыҡтар тыуҙырғайны.**

Юғары уҡыу йорттарының үтенесе буйынса, Рәсәй Мәғариф министрлығы коллегияһы быйылдан документтарҙы тик биш вузға ғына ебәреп булыуы тураһында иғлан итте. Унда ла һәр вузда тик өсәр һөнәрҙе генә һайларға мөмкин буласаҡ. Күптәр фекеренсә, был сара кешенең мөмкинлектәрен сикләү түгел. Сөнки мәктәпте тамамлар алдынан күпселек балалар үҙҙәренең буласаҡ һөнәрен һайламаған була әле. Ә һәр бала өсөн бишәр вузда өсәр һөнәр һайлау мөмкинлеге биреү ҙә улар алдында бик ҙур киңлектәр асасаҡ.

Әгәр берәйһе шулай ҙа үҙ бәхетен алтынсы урында ла һынап ҡарарға йөрьәт итһә, был барып сыҡмаҫ, тип ышандыра Рособрнадзор. Бының өсөн дөйөм Федераль база булдырыласаҡ. Унда бер үк



һөҙөмтәләр алтынсы тапҡыр килеп сыҡһа, ул автоматик рәүештә иҫкәртеү яһай.

Шулай уҡ уҡырға инеү ваҡыттары ла быйыл икәүгә ҡалдырыласаҡ. Улар 30 июль – 5 август һәм 5 - 10 август тип билдәләнгән.

Махсус йүнәлтмә менән бюджет урындарына уҡырға ебәрелеүселәр һаны дөйөм ҡабул ителеүселәрҙең 20 процентынан ашмаҫҡа тейеш тип билдәләнгән.

Тағы ла бер яңылыҡ: быйылдан һәр вуз Рособрнадзор билдәләгән иң түбән балдан тыш, үҙе лә һәр предмет буйынса айырым минималь балл билдәләй ала. Былтыр бындай түбән балдар тик профилле предметтар буйынса ғына билдәләнә ине.

Был ҡағиҙәләр бик оҙаҡ үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ, тиҙәр уны ҡабул итеүселәр. Йыл һайын яңы тәртиптәр булдырып, уларға өҙлөкһөҙ үҙгәреш-төҙәтмәләр индереп тороу күптәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырасағы билдәле бит инде. Шуның өсөн яңы ҡағиҙәләр былтырҙан бирле төрлө яҡлап тикшерелде.

Дөйөм алғанда, БДИ тигән һынауҙы үтеп, әле вуздарҙа уҡып йөрөүселәр, унан һис кенә лә ҡурҡырға кәрәкмәй, тип иҫкәртә. Заданиеларҙа мәктәп программаһында булғандарҙан да ҡатмарлыраҡтары юҡ, яҡшы уҡыған кеше өсөн уларҙы сисеү бер ни тормай. Иң мөһиме, иғтибарлы булырға ғына кәрәк. Сөнки төп хаталар ана шул иғтибарһыҙлыҡ арҡаһында – йә һорауҙы дөрөҫ аңламау, йә белгән яуапты яҙғанда ла техник хата ебәреү сәбәпле килеп сыға. Күптәрҙең фекеренсә, шпаргалкалар, хатта техник саралар (телефон, пейджер, фотоаппарат һ. б.) ҡулланыуҙың кәрәге юҡ, уларҙың эште ҡатмарландырыуы ғына ихтимал.

Былтырғы имтихандар өлгөләрен алып, уларҙы сисеп ҡарау ҙа ҙур ярҙам буласаҡ. Был үҙ белемегеҙҙе һынап ҡарау өсөн дә, тест ҡағыҙҙары менән яҡындан танышыр өсөн дә кәрәк буласаҡ. Һәр хәлдә, БДИ-ға барғас, һеҙ ул ҡағыҙҙарҙы тәүләп күреп ултырған кеше булмаясаҡһығыҙ, уларға ышаныслы тотонасаҡһығыҙ. Былтырғы имтихан тестарын интернет селтәре аша еңел табырға мөмкин.

БДИ алдынан репетитор яллап шөғөлләнеүгә төрлө ҡараш бар. Күптәр репетитор белем бирмәй, ә үҙ-үҙеңә ышанысты арттыра, йәғни психологик ярҙам күрһәтә тип һанай.




# Санала шыуып, олимпия уйындарына...



***Ергә ҡупшы ҡар ятыу менән, сана һөйрәп, балалар тау битләүҙәренә ашыға. Ә сана ярыштарын ойоштороу, махсус юлдар төҙөү һәм үҙенсәлекле ҡағиҙәләр ҡасан барлыҡҡа килгән һуң?***



Сана спорты XIX быуаттың урталарында Швейцарияла Альп тауҙары итәгендә тыуған. Санкт– Морица ял итеү йортоноң хужаһы Каспар Бадрутт был спортҡа нигеҙ һалыусы һанала. 1870 йылда Бадрутт төҙөгән сана шыуыу юлы бөгөнгө көнгә тиклем файҙаланыла икән, унда хатта ике тапҡыр Олимпия ярыштары уҙғарылған.

1883 йылдан Швейцарияла санала шыуыу буйынса беренсе ярыштар башлана, ә 1913 йылда Дрезден ҡалаһында халыҡ-ара сана спорты федерацияһына нигеҙ һалына. Олимпия уйындары программаһына сана спорты 1964 йылдан инеп китә. Ҡышҡы олимпия уйындарында сана спортына оҡшаш төрҙәр ҙә бар, мәҫәлән: бобслей һәм скелетон.



## Бобслей

**Бобслей (инглиз һүҙе. bobsleigh)** — ҙур тиҙлектә тау битләүенән махсус боҙ трассаһынан сананы йөрөтөп шыуыу. Швейцарияла уйлап тапҡандар.1888 йылда англия турисы Уилсон Смит ике сананы бергә ҡушып, Санкт-Морицанан бер нисә саҡырым аҫта ятҡан Челеринаға шыуып төшөп еткән. Шунда уҡ, Санкт-Морицала, XIX быуат аҙағында донъяла беренсе бобслей буйынса спорт клубы ойошторола.

Иң беренсе «боб (борсаҡ)» 1904 йылда уйлап сығарылған.Саналар тимерҙән эшләнә. Алдағы ике пар сана табаны (конькиҙар) бормалы руль менән, арттағылары тормоз менән йыһазландырыла.

Бобслей трассаһы бормалы-бормалы улаҡты хәтерләтә. Трассаның оҙонлоғо 1500 – 2000 метр булһа, бобслей саналарының тиҙлеге сәғәтенә 150 саҡырымға етә.

Донъя чемпионаты 1924 йылдан уҙғарыла. 2002 йылға тиклем бобслей буйынса ярыштар тик ир-егеттәр араһында уҙғарылды. Гүзәл заттар тәүге тапҡыр Солт-Лейк-Ситиҙағы ҡышҡы олимпия (2002 йыл) уйындарында ике урынлы саналарҙа ярыша.

## Скелетон

**Скелетон (инглиз һүҙе. skeleton — скелет, каркас)** — боҙло улаҡтан ҙур тиҙлектә сана шыуыу. Уның тарихы Канада индеецтарына барып тоташа. Уларҙа ағас саналар (тобогган) киң таралған икән. Скелетон, беҙҙең күреп өйрәнгән ябай саналарға оҡшаған, тик руле юҡ. Спортсы шыуғанда алға ҡарап эсенә ята, сананы уңға-һулға борор өсөн аяҡтарына беркетелгән тырнаҡтарҙы ҡуллана.

1913 йылда Халыҡ-ара тобогган ассоциацияһы ойошторола. 1914 йылда беренсе Европа чемпионаты уҙғарыла. Рәсәй спортсылары тәүге тапҡыр 1994 йылда Инсбрук һәм Санкт-Морицала уҙғарылған донъя кубогында сығыш яһайҙар.

Скелетондың тиҙлеге сәғәтенә 130 саҡырымға барып етә. Бобслей һәм сана спорты араһында иң ҡурҡыныс спорт төрө һанала.

Мәғлүмәт өсөн: www.rusbob.ru, http://ru.wikipedia.org/wiki/Бобслей, http://www.ws-news.ru

**З. ӘБИЛЕВ.**





# Белорет районы





Белорет районы Көньяҡ Уралдың иң бейек ерҙәрендә урынлашҡан. Башҡортостандың иң ҙур районы – майҙаны 11501 квадрат километр. Районның 82 проценты урмандар менән ҡапланған. 84 ауылда 34,4 мең кеше йәшәй. Район аша Ҡарлыман – Магнитогорск тимер юлы һәм Булгаково – Магнитогорск автомобиль юлы үтә.



Белорет районының гербы йәшел ҡаяташ башында зәңгәр фонда башын һулға бороп ултырған ғорур бөркөт һынынан ғибәрәт. Был ябай символ оло мәғәнәгә эйә: ошо ерҙе төйәк иткән Ҡатай һәм Тамъян ырыуы башҡорттарының юғары рухын да сағылдыра, белореттар яулаған һәм яулаясаҡ бейеклектәрҙе лә күрһәтә.

Белорет ере илебеҙгә 13 Советтар Союзы Геройы, ике Рәсәй Федерацияһы Геройы, дүрт Социалистик Хеҙмәт Геройы, өс СССР-ҙың халыҡ артисы биргән. Бөркөттөң алтын төҫө был ерҙәрҙең ҡаҙылма байлыҡтарының күплеге тураһында һөйләй, ә йәшел ҡая төҫө – мәңгелек, азатлыҡ һәм үҙаллылыҡ символдары. Герб аҫтынан һыҙылған көмөш һыҙат – районға исем биргән Ағиҙел йылғаһын һынландыра.

Авторы – Ю. Калинкин.






# 25 ғинуар – Рәсәй студенттары көнө



## Йәштек иле

***25 ғинуар – изге Татьяна көнө һәм Мәскәү университетына нигеҙ һалынған көндә 2005 йылда ул ваҡыттағы президент Путиндың Рәсәй студенттары көнө тип иғлан итеүен барыһы ла белә. Асылда Путиндың ике быуаттан ашыу дауам итеп килгән байрамға рәсми төҫ биреп кенә ебәрҙе, сөнки МДУ асылған көн Рәсәйҙә борондан студенттар көнө һаналып килде.***



Тәүге университеттар барлыҡҡа килгәндә унда уҡыусыларҙы школяр тип йөрөткәндәр. Аҙаҡтан был һүҙҙе студент (латинсанан студенс – ҡылым, “шөғөлләнеүсе” тигәнде аңлата) һүҙе алыштыра. Ул башта уҡыу йорттарында уҡыусыларҙы ла, эшләүселәрҙе лә аңлата. Һуңынан, ғалимдар өсөн айырым дәрәжәләр ҡабул ителгәс, был һүҙ менән тик уҡыусыларҙы ғына атай башлайҙар. Рәсәйҙә һәм тағы бер нисә илдә студент термины тик вуз уҡыусыһына ғына ҡағыла. Шуға ҡарамаҫтан Рәсәй закондарында һаман был терминдың рәсми билдәләмәһе юҡ.



Рәсәйҙә бөгөн 1465 юғары уҡыу йортонда 6,5 миллион студент уҡый. Шуларға 2761 урта махсус уҡыу йортондағы 2,5 миллион уҡыусыны ла ҡушһаң, ул тотош бер ил халҡы булып китә. Барыһы ла йәш, дәртле, маҡсатҡа ынтылышлы, алдынғы ҡарашлы. Ана шул сифаттары өсөн студенттарҙы һәр илдә лә, һәр ваҡытта ла төрлө социаль һәм сәйәси акциялар үткәргәндә актив файҙаланалар.

Сит илдәрҙә нисә Рәсәй студенты белем алыуы хаҡында теүәл генә статистика юҡ. Сөнки күптәр унда үҙ белдеге менән сығып китә лә, бер юлы эшләп тә, уҡып та йөрөй. Яҡынса улар 10 меңдән ашыу. Был күп түгел. Рәсәйҙә сит илдәрҙән килеп уҡыусылар һаны 42 меңдән аша бит. АҠШ-та, мәҫәлән, Рәсәйҙән 1500 самаһы ғына студент белем ала. Һәм, һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, уларҙың 70 проценты Рәсәйгә кире ҡайтырға иҫәп тотмай.

Башҡортостанда 12 юғары уҡыу йортонда һәм 18 төрлө вуз филиалдарында 145 мең студент уҡый. Сит илдәрҙән беҙҙә 400-ән ашыу кеше белем ала.

### Белешмә өсөн:

**Беҙ Рәсәйҙә уҡыу йорттары символы рәүешендә күреп өйрәнгән МДУ-ның Ленин тауҙарындағы күркәм бинаһы, асылда, студенттар ятағы итеп 1953 йылда төҙөлгән. 36 ҡатлы бинаның бейеклеге 239,5 метр. Уны 12 тонна ауырлығындағы шпиль ослай. Урта өлөшөндә университет администрацияһы, ректорат, геофак менән мехфак урынлашҡан. Ике ҡанатында студенттар өсөн 5754 бүлмә, уҡытыусылыр өсөн 184 фатир бар. Бынан тыш,был бинала тағы 1500 урынлыҡ тамаша залы, 800 урынлыҡ клуб, бассейн, гимнастика залдары тағы бик күп кәрәкле бүлмәләр бар.**









# СКАНВОРД
















Абруй, дәрәжә
Япмалы бәләкәй бысаҡ
Туҡымалағы арҡыры еп
Ҙур аҡ балыҡ
Рәсәйҙәге республикаһы
2
Эре йылы яҡ емеше
Йылға
Рәсәйҙәге ҡала
Билдәләнгән ҡанун
Ҡараптағы «субботник»
Ҡауырһын ҡуйылған уҡ
Рәсәйҙәге ҡала
Сәхнә уты
Рәсәйҙәге ҡала
Рәсәйҙәге республика
1
Рәсәйҙәге ҡала
Тынлыҡ (антоним)
Йомшаҡ күн
Рәсәйҙәге республика
Рәсәйҙәге ҡала
Флоттағы рядовой
Ҡарап баҫҡысы
Рәсәйҙәге ҡала
Ҡараптың «күкрәге»
Эштәге бер этап
Мәс хәрә
Йылға
5
Рәсәйҙәге ҡала
Рәсәйҙәге ҡала
Париж аэропорты
Үрмәләүсе үлән
Хәрәкәттәрҙең үҙ-ара берәмлеге
Йонлоҙ сәскә
Тымыҡ океанда Франция утрауы
Рәсәйҙәге ҡала
Ҡараптың иң аҫҡы ҡаты
Бер нисә кәрәкле әйберҙе ерләтмәк
Иҙелгән, ярлы кеше
Әткә бойороҡ
Һоҫа эсенә ҡуя торған үҙәк
4
Ергә ҡағылған бетон бағана
Рәсәйҙәге ҡала
Эре хәрби ҡарап
Бер-береһенә бәйле ике картина
Донъя бер генә башланмаҫтан тора тигән тәғлимәт
Рәсәйҙәге республика
Рәсәйҙәге ҡала
Рәсәйҙәге ҡала
Рәсәйҙәге ҡала
Ҙур эсле ауырыу бала
Кәмәнең йөрөткесе
Йылы ҡуныс
Көйләп һөйләүгә ҡоролған ҡыҫҡа ария
Ҡаты ағас
3
Рәсәйҙәге ҡала
Грузин «милләте»
Рәсәйҙәге ҡала
Молдовияның беренсе президенты Мирча (...)
Рәсәйҙәге ҡала
Башҡорт музыка ҡоралы
Һыу аҡҡан йыға
Яулан-ған уңыш

Төрлө төҫтәр менән билдәләнгән хәрефтәрҙән башҡорт халыҡ мәҡәлен йыйығыҙ.

# Көләмәстәр

**– Һин ниңә шул тиклем ҡалтыранаһың? Һорарҙар, тип ҡурҡаһыңмы? – тип һорай уҡыусы дәрестә иптәшенән.**

**– Юҡ, мин үҙемдең яуаптарымдан ҡурҡам, – тип яуаплай уныһы.**

* * *

Психология дәресе бара. Йәтешләп ултырып алып, уҡытыусы дәрес темаһын аңлата:

– Бөгөн беҙ кеше психологияһының өс төрөн үтәсәкбеҙ: ғәжәпләнеү, ҡыҙыу һәм ярһыу. Башта аныҡ миҫалда күрһәтәм.

Ул телефон ала ла, башына килгән һандарҙы йыя:

– Һаумыһығыҙ, ә Солтанды мөмкинме?

– Беләһегеҙме, бында ундай кеше юҡ, шикелле...

– Бына, – ти уҡытыусы, – ябай ғәжәпләнеү миҫалы. Артабан дауам итәбеҙ. Тағы йыйыбыҙ.

– Һаумыһығыҙ, ә Солтан килмәнеме әле?

– Ундай кеше юҡ, тип әйттем бит!

– Бына, икенсе осраҡ миҫалы. Дауам итәбеҙ, – ти ҙә уҡытыусы, шул уҡ һандарҙы йыя.

– Солтан һаман юҡмы ни?

– Беләһеңме, һин кем – эт!

– Аңлашылдымы, балалар?

Шул саҡ беренсе парта артынан бер малай тора.

– Ғәфү итегеҙ, һеҙ дүртенсе төрҙө онотторғоҙ...

– Ниндәй тағы?

– Аҡылдан яҙыу стадияһы. Бына, тағы шул номерҙы йыйабыҙ ҙа:" Хәйерле көн! Был мин – Солтан. Мине һораусылар булманымы?" – тип әйтәбеҙ.

* * *

**Әҙәбиәт дәресе.**

**– Шунан, балалар, Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" романын кем уҡыны? – тип һорай уҡытыусы. Тынлыҡ... Шул саҡ бер малай ырғып тора.**

**– Уны нимә, уҡырға кәрәк инеме?**

**– Эйе, ә ниңә?**

**– Ә мин күсереп яҙҙым!...**


АМАНАТ ©

Республика балалар-үсмерҙәр журналы

Республиканский детско-юношеский журнал

№ 01 (794), Гинуар, 2010

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН

Мөхәрририәт:

Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ,
Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА,
Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныҡлыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612

БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.
450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:
баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 223-91-83;
бүлектәр – 277-74-80.
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru

РЕКВИЗИТТАР:
г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала "АМАНАТ"
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО "УралСиб",
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.

Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 11.01.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108 $^{1}/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 17423. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0002.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.




# Иғтибар! Яңы конкурс: *“Минең республикам!”*

Ҡәҙерле дуҫтар! Белеүегеҙсә, 2010 йыл Башҡортостанда Республика йылы тип иғлан ителде. Ошо айканлы йәш рәссамдар араһында “Минең республикам!” тигән конкурс башлайбыҙ.

Йомғаҡ йыл аҙағында яһаласаҡ. Еңеүселәргә иҫтәлекле бүләктәр көтә.

Был һанда Өфөләге 2-се сәнғәт мәктәбе уҡыусыларының (педагогтары – Вантеева Флоренс Валерьевна) һүрәттәрен тәҡдим итәбеҙ.

1. **“Мәктәп”.** Вика Алексеева.
2. **“Өләсәйем”.** Дарья Коняева.
3. **“Өфө – минең ҡалам”.** Элина Нәжметдинова.
4. **“Йәйғор”.** Маргарита Ғимаева.
5. **“Ат”.** Маргарита Шурмилёва.
6. **“Портрет”.** Катя Федорова.
7. **“Тышта”.** Настя Әхмәтшина.
8. **“Ҡышҡы уйындар”.** Эрика Дусәева.
9. **“Сәскәләр”.** Айгөл Ғәлләмова.



1


2


3


5


7


4


6


9


8

# Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына – 90 йыл



Журналдың индексы – 73317